✓*Икенсе ярты йыллыҡҡа гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы бара. "Киске Өфө" гәзитен республиканың һәр ауылында, һәр ҡалаһында алдырып уҡып була: почталарҙа 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә ярты йылға яҙылыу хаҡы - 251 һум 64 тин тәшкил итә.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

28 АПРЕЛЬ - 4 МАЙ (АЛАҒАРАЙ-ҺАБАНАЙ) 2007 ЙЫЛ

№17 (227)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Беренсе май ҡалды...**
**байрамы онотолдо**



2

**Аҡ батша биргән грамота**
**булмышыбыҙҙы раҫлаусы документ ул**



6-7

**Көмөш беләҙек**



10

**Күңел күрһәткесе буйынса**
**һәр береһенә Гран-при бирерлек**



16

**ТВ ПРОГРАММАҺЫ**

14-15

*Башҡорттарҙың ҡунаҡсыллығын, бигерәк тә ситтән килгәндәргә ихтирамдарын беренсе урынға ҡуйырға кәрәк. Башҡорттоң ҡунағы — изге йән, уның өсөн ул иң һуңғы һарығын йәки тайын булһа ла һуйып ашата. Ҡунаҡ ҙур дәрәжәле булһа ла, башҡорт, ялағайланып, түбәнселеккә төшмәй, уға ярамһаҡланмай, үҙ абруйын һаҡлап ҡала белә.*

**Д. П. Никольский.**



ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ЙОЛАЛАР ЙОЛАЛЫ ЕРҘӘ ТЫУА,

## йәки әбйәлилдәрҙең тағы бер байрам уйлап сығарғаны

**Байрам кәйефен саманан артыҡ яратҡандар тураһында "уларға ни, көндә байрам, көн дә туй", тиҙәр. Әммә "заманалар ауыр, йәшәү насар", тип, төшөнкөлөккә бирелеп, күңелдәрен нәҫ баҫҡандар тураһында берҙә генә лә өндәшмәйҙәр. Бөгөн бошонһаң, иртәгә лә бошонорға кәрәк, ғәме уянып, кисә елкенгән иртәгә лә дәртле буласаҡ. Шулай түгелме ни? Бына, мәҫәлән, әбйәлилдәр тағы бер байрам уйлап тапты: Башҡортостандың бынан 450 йыл элек үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуы хөрмәтенә бик мәртәбәле сара үткәрҙе. Киләсәктә ул сара йолаға әүерелерме-юҡмы - ваҡыт һынауында, әммә бындай ғәжәйеп байрамдарҙы халыҡ йолалары электән ныҡлы булған ерлектә генә үткәрергә була.**

Был көндө Яктыгүл юлында йыш йөрөгән Магнитогорск халҡы: "Был әбйәлилдәр тағы ни уйлап сығарған?" - тип аптыраны. Ысынлап та, һоҡланырлыҡ, ғәжәпләнерлек күренеш булды был. Ике йөҙҙән ашыу кешенән торған делегация биҫтәләгән автобус, еңел машиналарға тейәлеп, район үҙәге Асҡар-Яктыгүл йүнәлешендәге юлда оҙон колонна хасил иткәйне. Байым яғынан иһә байрамса биҙәлгән аттарҙа башҡорт һәм рус кейемендәге һыбайлылар, Байым ауыл Советының иң оҫта саңғысылары, аллы-гөллө сәскәләрҙе хәтерләткән сағыу милли кейемдәге фольклор ансамблдәре шаян, төртмә таҡмаҡтары менән ана шул делегацияны ҡаршы ҡаршы алды - ҡунаҡтар менән ҡаршы алыусылар бергә ҡушылғас, халыҡ иҫәбе бермә-бер артты. Сатлама һыуыҡта боҫорап торған бишбармаҡ, быу бөркөп ҡайнап ултырған самауырҙар, милли ашһыуҙың төрлөлөгөнән һығылып торған өҫтәлдәр, ысынлап та, ғәжәйеп күренеш ине. Бына ошолай башланып китте Әбйәлилдәге байрам. "Әбйәлилем - ғәзиз ерем" исеме аҫтындағы был эстафета-фестиваль ай ярымға һуҙылды.

**(Дауамы 5-се биттә).**

✔ ***Борис Ельцин үҙе лә, уның дәүере лә тарихта тороп ҡалды. Ә тарих беҙҙең илдә үҙенсәлекле яҙыла. Кисә генә "ҡара" булған нәмә, иртәгә "аҡ" булып китергә мөмкин.***



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ТАРИХ ЭҘҘӘРЕ ТӨРЛӨ БУЛА,

## йәғни Ельцинса ла, Путинса ла булырға мөмкин ул

**Үткән аҙнала илебеҙ Борис Ельцин менән хушлашты. Дәрәсәргә, Рәсәй Федерацияһының беренсе Президенты Борис Николаевич Ельцин менән бәхилләште. Һәм үткән аҙнала уҡ Рәсәйҙең әлеге Президенты Владимир Владимирович Путин йылдағыса Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһе менән сығыш яһаны. Был ике ваҡиға, береһе - ҡайғылы, икенсеһе - рәсми, бер-береһе менән туранан-тура бәйле түгел һымаҡ. Эйе, Борис Ельциндың вафаты Владимир Путиндың сығышын бер көнгә кисектереп торорға мәжбүр итте. Әммә эш унда ғына түгел.**

Борис Ельцин арабыҙҙан 76 йәшен тултырып китте. Беҙҙең халыҡта үндайҙар тураһында, ғәҙәттә, "Йәшәрен йәшәгән, ашарын ашаған" тиҙәр. Йәғни, тәҡдир тарафынан бирелгән ғүмерен тулыһынса үткән, тормоштоң әсеһен һәм сөсөһөн етерлек татыған, яҙмыш китабында яҙылғанын тулыһынса үтәгән. Балаларын кеше иткән, аяҡҡа баҫтырған, ейән-ейәнсәрҙәрен һөйгән, донъя гиҙгән, яманын да, яҡшыһын да күргән. Бер һүҙ менән әйткәндә, йәшәрен йәшәгән. Урыны гүрҙә, ауыр тупрағы еңел булһын, ти ул саҡта халыҡ.

Үлеләр тураһында тик яҡшыны ғына һөйләргә кәрәк, тиҙәр. Рәсәйҙең тәүге президентына был һүҙҙәр ҡағылмайҙыр ул. Борис Ельцин ҡапма-ҡаршылыҡлы шәхес булды. СССР-ҙа тыуған кеше, шул уҡ ваҡытта ошо дәүләтте юҡҡа сығарыусыларҙың береһе булараҡ тарихта ҡалды. КПСС тарафынан тәрбиәләп үстерелгән сәйәсмән Ельцин, мәле еткәс, ошо партияға ҡаршы баш күтәрҙе һәм уны юҡ итеүгә гәйәт күп көс һалды. Хәйер, үҙгәрештәр дәүерендә башҡаса мөмкин дә түгелдер. Халыҡ уны төрләсә ҡабул итте. Берәүҙәр "Ельцин" тиһәләр, 1991 йылдағы ГКЧП болаһы һәм СССР-ҙың тарҡалыуын, 1993 йылда Юғары Советты аттырыу һәм яңы Рәсәй Конституцияһын ҡабул итеүҙе, Чечня һуғышын һәм хосусилаштырыуҙы, инфляция һәм "МММ", "Хопер-инвест" кеүек финанс пирамидаларын, бер-бер артлы барлыҡҡа килгән һәм юҡҡа сыҡҡан яңы партиялар һәм хәрәкәттәр, әллә ҡайҙан пәйҙә булған яңы шәхестәр һәм исемдәр, яңы гәзиттәр һәм журналдарҙы иҫенә төшөрәләр. Икенселәр өсөн иһә Ельцин быға тиклем бер тапҡыр ҙа татып ҡарамаған һәм шуға күрә айырыуса татлы булған Азатлыҡ төйгоһо менән бәйләләр. Уның "Суверенитетты күпме йота алаһығыҙ, шул хәтлем йотоғоҙ!" тигән һүҙҙәрен Федератив Килешеү төҙөүҙән милли республикалар халҡы шатланышып, дәртләнеп ҡабул итһә, мәскәүҙәр, урыҫ төбәктәре иһә быны Рәсәйҙе таркатыу, илде юҡҡа сығарыу, тип аңланы. Берәүҙәр Борис Ельциндың дыуамал һәм үҙ һүҙле тип ҡабул итһә, икеселәр иһә биргән һүҙендә аҙаҡҡаса торған, әйткәнен кире алмаған, ярһыу холоҡло шәхес булараҡ үҙ итте. Берәүҙәр өсөн Ельцин осоро Чубайс һәм Ходорковский, Немцов һәм Гайдар, Черномырдин һәм Кириенко исемдәре менән бәйле булһа, икенселәр өсөн иһә - Рәхимов һәм Шәймиев, Лужков һәм Собчак...

Борис Ельцин һәр саҡ ваҡиғалар уртаһында булды. Һабантуйҙа күҙҙәре бәйле килеш көршәк ватырға ла тартынманы, йәштәр байрамында сәхнәгә сығып бейергә лә оялманы, рәсми протоколдарҙы боҙоп, ҡатын-ҡыҙҙар менән суп иттереп үбешеп тә алыр ине, билдәле журналист ҡатын-ҡыҙ эргәһенән үтеп барғанда ҡытыҡлап китеүҙән дә баш тартмаҫ ине. Шуғалыр ҙа, берәүҙәр уның кемгәлер янап төйөлгән йоҙроғон иҫенә төшөрһә, икенселәр иһә - ихлас йылмайыуын.

Борис Ельциндың президент посынан ваҡытынан алда, егерменсе быуаттың һуңғы көнөндә китеүе лә үтә мәғәнәле булды. Яңы быуатта Рәсәй менән яңы лидер идара итергә тейеш, тигәнгә ишара булды инде был. Президенттың Яңы йыл, яңы быуат тыуыу айканлы котлауын көтөп ултырған миллионлаған халыҡ уның "Мин китәм!" тигән һүҙҙәрен бер ни тиклем алйырғап, аптырап ҡабул итте. Беҙҙең илдә уға тиклем бер генә етәксе лә иң юғары вазифанан үҙ теләге менән киткәне юҡ ине әле. Вәкәләттәрен үҙе теләп һалғандан һуң да илдең сәйәси тормошона ҡыҫылып барманы Ельцин. Тыуған көнө уңайы менән генә телевизор экрандарында бер нисә минутҡа пәйҙә булды ла тағы ла юғалды. Әлеге президентыбыҙ уға кәңәш, йә ярҙам һорап барғанмы - уныһы беҙгә, ябай халыҡҡа, билдәһеҙ. Барһа ла, Ельцин уға ниндәйҙер аныҡ кәңәш биргәнме, әллә "Хәҙер һин үҙең баш, үҙең түш" тип бороп сығарғанмы - уныһын да белмәйбеҙ. Хатта уның үлеме лә ил өсөн, хатта Президент өсөн, көтөлмәгән ваҡиға булды. Юғиһә, ашығыс рәүештә сираттағы Мөрәжәғәтнамәне иғлан итеүҙе күсерергә тура килмәҫ ине.

Борис Ельцин үҙе лә, уның дәүере лә тарихта тороп ҡалды. Ә тарих беҙҙең илдә үҙенсәлекле яҙыла. Кисә генә "ҡара" булған нәмә, иртәгә "аҡ" булып китергә мөмкин. Етмеш йылдан ашыу "Бөйөк Октябрь революцияһы" булып йөрөгән ваҡиға бөгөн "большевиктарҙың 1917 йылдағы түңкәрелеше" булған кеүек. Әлеге Президентыбыҙ ике-өс йыл элек үҙенең сираттағы Мөрәжәғәтнамәләренең береһендә, исемдәрҙе атамай ғына, СССР-ҙың тарҡалыуына "XX быуаттың иң оло катастрофаларының береһе", ә Ельциндың дәүеренә "илдең тарҡалып, юҡҡа сығып барған мәле" тигән баһа биргәйне. Ярай, быныһы уның намыҫында. Ә шулай ҙа Рәсәй тарихында 1991-2000 йылдар шундай сағылыш табырмы, ә республикаларҙың Рәсәй составында үҙ аллы, аҙым һайын Мәскәүгә баш эймәй йәшәргә ынтылыуы, төбәктәрҙе нығытып, көслө Рәсәй булдырырға тырышыуы "дәүләтте тарҡатыуға табан хәрәкәт" тип баһаланырмы икән? Быға ышанғы килмәй.

Һигеҙ йыл буйына Рәсәй президенты булған Владимир Путин үҙенән һуң киләсәк етәксегә ниндәй илде ҡалдыра һуң? Һәм уның эшмәкәрлеге тарихта нисегерәк баһаланыр икән? Был турала яҙыуы ла, уйлауы ла иртәрәк әле. 2008 йылдың мартына тиклем Владимир Путин Рәсәйҙең тулы хоҡуҡлы етәксеһе. Һәм үткән аҙнала яңғыраткан Мөрәжәғәтнамәһенә ҡарағанда, ул Президент вазифаһынан киткән хәлдә лә дәүләттең сәйәси тормошонан китергә йыйынмай. Шуға ла ул сығышында үткән дәүергә һығымта яһарға, башҡарған эштәрен барларға һәм анализларға ашыҡманы. Был эште ул тарихсыларға ҡалдырҙымы, әллә Президент һайлауҙарынан һуң беҙ Владимир Путиндың хушлашыу сығышының шаһиттары булырбыҙмы, әлегә аңлашылмай. Бөгөнгә шуныһы ғына асыҡ - Владимир Путин Рәсәй Президенты булараҡ, бер көн, ай йәки йыл менән генә йәшәмәй. Уның халыҡтың тормошон яҡшыртыу, иктисадҡа яңы һулыш өрөү, киләсәк быуындарҙы һәм буласаҡ пенсионерҙарҙы яҡлау, илдең именлеген тәьмин итеү буйынса уй-фекерҙәре, Хөкүмәткә һәм Федераль Йыйылышҡа тәҡдимдәре 2010-2012, хатта 2020 йылдарға тиклем барып етә. Был иһә, үҙ сиратында, Путиндың президентлыктан киткәс тә үҙ инициативаларының үтәлешен күҙәтеп барырға, тикшерергә тейешлеген аңлата.

Өҫтәрәк Владимир Путин үҙе етәкселек иткән осорҙо баһаларға ашыҡманы, тип яҙғайным бит әле. Шулай ҙа, Президент бер-ике һанды әйтеп үтмәй булдыра алманы. Бөгөн Рәсәй донъяның иң эре ун иктисадына инә, тип белдерҙе ул сығышының башында һәм шунда уҡ 2000 йылдан халыҡтың килемдәре ике тапҡырға артты, тип өҫтәп ҡуйҙы. Әлбиттә, Путин был уңыштарҙың туранан-тура донъяла нефткә һәм газға хаҡтарҙың бермә-бер артыуы менән бәйле булыуы тураһында аныҡлап торманы. Ғөмүмән, күҙәтеүселәр фекеренсә, Путиндың башҡа йылдағы сығыштарынан айырмалы рәүештә, быйылғыһы конкрет маҡсаттар менән тулыландырылған. Халыҡтың тормошон яҡшыртыу, торлаҡ төҙөү, илдең инфраструктураһын яңыртыу һәм башҡалар, һәм башҡалар. Аңлашыла, бер йыл эсендә быларҙың барыһын да үтәп бөтөп булмаясаҡ. Путиндан һуң килгән кешегә, төп байлығыбыҙ булған нефткә һәм газға хаҡтар түбәнәйһә, бик ауырға тура киләсәк. Хәйер, бөгөн Президентыбыҙ ул хаҡта уйламай, шикелле. Ул тарихта илде аяҡҡа баҫтырған, үҫтергән шәхес булараҡ матур эҙ ҡалдырырға ниәтләй. Һәм быны өсөн ҡулынан килгәндең барыһын да эшләй.

**Таһир ИШКИНИН.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## "РЭКЕТ"

**... юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙған өсөн Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы ҡабул ителәсәк документтар проектын тикшерә.** Унда штрафтарҙың һанын 10-20 тапҡырға тиклем арттырыу, мәрәйҙәр системаһын индереү, 15 тәүлеккә тиклем арест һәм башҡа саралар ҡарала. Кем нисек уйлайҙыр, минеңсә, был саралар юл хәүефһеҙлеге инспекторҙарына водителдәрҙе "мулыраҡ итеп талау" өсөн уйлап сығарылған кеүек. Быға тиклем водителдәр инспекторға 100 һум биреп ҡотола ине, хәҙер иһә... Юҡ, елле иномаркаларҙа елдереүселәр зыян күрмәйәсәк был "яңылыҡтан". Улар бар яктан да яклаулы һәм һаклаулы, инспектор менән дә улар руль артында ғына ултырып һөйләшә. Беҙ, иһә, инспекторға үҙебеҙ йүгерәбеҙ. Инспекторҙар һаман да тик "баҙыҡ" күренгән машиналарҙы ғына туктатасаҡ һәм елкәһен тырнап, бәйләнер сәбәп эҙләйәсәк. Инфляция бар бит илдә, йәмәғәт, инфляция, автоинспекторҙарға ла үҙ ғаиләһен аҫрарға кәрәк. Кыҫкаһы, был яңылыктарҙан күберәк иң ғәҙел һәм үҙ көсө менән аҡса эшләп машина һатып алыусылар зыян күрәсәк. Дәүләт Думаһының халыҡты талау маҡсатындағы заманса "рэкет"ы ошолор инде. Штрафтарҙы 10-20 тапҡырға арттырыу ришүәт хаҡын да шунса тапҡырға арттырасаҡ.

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Башҡорт дәүләт университеты студенты, билдәле боксер, Рәсәй чемпионатының көмөш һәм бронза миҙалы призеры Нияз Фәйзуллинга халыҡ-ара класлы Рәсәй спорт мастеры исеме бирелде.

✔ БР Милли музейы хеҙмәткәрҙәре "Фронтташ әхирәттәр" тигән фотокүргәҙмә әҙерләне. Ул 3 майҙа Милли йәштәр театрында күрһәтеләсәк.

✔ Республика клиник дауахананың хирургия бүлексәһе октябрь тиәләрендә яңы туғыҙ ҡатлы бинаға күсәсәк.

✔ Май байрамдарынан һуң "Йәшел сауҡалыҡ" бисәтәһендәге "Иҫке Өфө" һәм Сипайловолағы Гагарин баҙарҙары һүтеләсәк. Өфөләге 38 баҙарҙың бөтөн талаптарға яуап биргән 15-е генә һаҡланып ҡаласаҡ.

✔ БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев Европа Союзы һәм Рәсәй Хеҙмәттәшлеге программаһы секцияһы етәксеһе Пьер Дибман һәм РФ Хоҡуҡ һаклау органдары ассоциацияһы эргәһендәге хоҡуҡ институт директоры профессор Сергей Максимов менән осрашып, һөйләшеүҙәр алып барҙы.

✔ Быйыл Салауат йыйыны 15-17 июндә Сакмағош районында үтәсәк. Байрамды ойоштороу комитетының тәүге ултырышы булып үтте. Уны БР Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илишев алып барҙы. Быйылғы йыйындың сценарийын яҙыусы Таңсулпан Ғарипова яҙҙы, Айрат Абушахманов сценарийҙы ҡуйыусы баш режиссер буласаҡ.

✔ "Родина" кинотеатрында "Башҡортостан" киностудияһының "Рәхмәт" тигән яңы видеофильмы презентацияһы булып үтте. Ул рус телендәге субтитрҙар менән башҡортса төшөрөлгән. Фильмдың авторҙары Зөһрә һәм Таңсулпан Буракаевалар, режиссеры Әнүәр Райбаев.

✔ Өфөлә 4-8 майҙа Вера Тиманова исемендәге IV региональ йәш пианистар конкурсы буласаҡ. Конкурста музыка, музыкаль-хор һәм сәнғәт балалар мәктәптәренән йыйылған уҡыусылар ҡатнаша.

Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев баш ҡалала майиюнь айҙарында Славян яҙмаһы һәм әҙәбиәте көндәрен үткәреү тураһында ҡарар ҡабул итте.

✓ ***Был нурҙарҙы беҙ ауыл халҡының күҙ ҡарашында, беҙҙең һөйләгәндәрҙе зиһендәренә һеңдереп тыңлай белеүендә лә тойҙоҡ. Башҡа кеше һөйләгәнде тыңлай белеү - интеллигентлыҡтың бер билдәһе.***



*БЕҘҘЕҢ ОСРАШЫУҘАР*

# Мәкәштә лә барҙар

## беҙҙең дуҫтар, фекерҙәштәр

**Һәр районда журналист халҡын тартып торған бер ауыл була. Дәүләкәндә ундай ауыл - Мәкәш. Бынан ун-ун биш йыл самаһы элек, колхоз рәйесе булып Минзаһир Хәмиҙуллин эшләгәндә, был ауылдан журналистарҙың аяҡ юлы өҙөлмәне тиерлек.**

Беренсенән, бында республикала беренселәрҙән булып мәсет төҙөп ултырттылар. Ауылға иман ҡайтарыуҙың берҙән-бер юлы динебеҙҙә икәнен аңлап, ошо мәсетте тергеҙеүгә күп көс һалған колхоз рәйесе үҙе хажға ла барып ҡайтты. Ысынлап та, ауыл иман нуры менән нурланды. Ул ин айыҡ ауыл тип иғлан ителде. Иртән ҡарттар, төштән һуң мәктәп балалары, кискеһен йәштәр мәсеткә йөрөп, доғалар өйрәндә. Һәр хәлдә, ул саҡта гәзиттәр ошолар хаҡында һоҡланып яҙҙы. Тағы бер нәмә ғәжәпкә ҡалдырҙы бында килеп киткән журналистарҙы: шул ваҡытта уҡ колхоз рәйесе ауылдың һәм ауылда йәшәүсе нәҫел-нәсәптең шәжәрәләрен төҙөй башлағайны. Махсус рәүештә кемдәрҙелер Өфөгә архивҡа ебәреп, Мәкәштә йәшәүселәрҙең туғанлыҡ ептәрен бер-нисә дәфтәргә теркәгәйне Минзаһир ағай, шуларҙы ауылға килгән берәүгә ғорурланып күрһәтә торғайны. Бына ошолай хәтерҙә ҡалған Мәкәш беҙҙә лә.

Бына шул ауылда әле күптән түгел "Киске Өфө" гәзите журналистары менән осрашыу үткәрелде. Мәкәш ауыл Советы рәйесе Миҙхәт Маликов, идарасы Ләйсән Фәйзрахманова, ауыл мәҙәниәт йорто директоры Мөнирә Моратшина, художество етәксеһе Зәйтүнә Зарипова, китапханасы Гөлсәсәк Сәлимгәрәева - һәр береһе беҙҙең осрашыуҙы ойоштороуға ҙур көс һалған. Шуға ла мәҙәниәт йортонда халыҡ байтаҡ йыйылғайны. Ауылдың почта хеҙмәткәрҙәре - Разилә Йосопова менән Рәшиҙә Камалетдинова һылыуҙар ҙа йүгерешеп килеп еткәйне.



Гәҙәттәгесә, мәктәп уҡыусылары алғы рәттәрҙә, өлкәндәр арттараҡ урын алды. Мәкәштәр беҙҙең сығыштарҙы айырата диҡҡәт менән тыңланы. Ике сәғәткә яҡын барған йәнле аралашыуҙа беҙ шуға инандыҡ: ҡасандыр Мәкәш ауылында мәсет төҙөү, айыҡ тормошҡа йөҙ менән боролоу кеүек изге башланғыстар емештәрен бирмәй ҡалмаған. Иң мөһиме - мәкәштәрҙең йөҙөндә ихласлыҡ, тәбиғилек, шәреҡ нуры балҡый. Был нурҙарҙы беҙ ауыл халҡының күҙ ҡарашында, беҙҙең һөйләгәндәрҙе зиһендәренә һеңдереп тыңлай белеүендә лә тойҙоҡ. Башҡа кеше һөйләгәнде тыңлай белеү - интеллигентлыҡтың, ололоҡло һәм кеселекле була белеүҙең сағыу бер билдәһе.

"Улар үҙҙәрен һеҙҙең алда шулай тоторға тырышҡан ғына", тип әйтеп, беҙҙең фекерҙе булергә теләүселәр ҙә табылыр. Ундай ҡарар сығарырға ашыҡмағыҙ, сөнки кисә аҙағында быға тиклем "Киске Өфө" гәзитен өс кенә кеше алдырып уҡыған мәкәштәрҙән 25 кеше үҙ теләге менән алдағы ярты йыллыҡҡа беҙҙең гәзиткә яҙылып та ҡуйҙы. Бының өсөн беҙгә һәм уларға ошо осрашыу ҙа етте, Мәкәш ауылы халҡы үҙен киң эрудициялы, мәҙәниәтле халыҡ икәнен тағы бер тапҡыр иҫбат итте.

> ***Әҙәпле аралашҡанда иң ауыр маҡсаттар ҙа еңел табыла һәм бикле ишектәр асыла. Йомшаҡ һүҙҙәр күңелдәрҙе рәхәтләндерә. Ихлас һүҙ ҙур бүләктән дә артыҡ шатлыҡ килтерә. Асыҡ йөҙ һәм ябайлыҡ дуҫлыҡ һәм мөхәббәт дәлиле була. Шуның өсөн кем булһағыҙ ҙа булығыҙ, әммә әҙәм балалары менән әҙәпле аралышығыҙ.***
>
> **РИЗАИТДИН**
> ***нәсихәттәренән.***

Халҡыбыҙҙың үҙ тарихына, мәҙәниәтенә йөҙ менән боролған йылдарҙа тәүгеләрҙән булып "Берҡаҙан" ҡурайсылар ансамбле төҙөгән, республика һәм төбәк-ара конкурстарҙа лауреат һәм дипломат исемдәре яуларсылар ҙа - шул уҡ мәкәштәр.

Кисәбеҙҙәге Башҡорт дәүләт филармонияһынан ижадташ дуҫтарыбыҙ - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, танылған йырсы Лилиә Ишемйәрова менән Башҡортостан Милли музыка ҡоралдары оркестры музыканты, төрлө конкурстарҙа күп тапҡырҙар лауреат исемен яулаусы ҡурайсы Тимур Юлгилдиндың сығыштарын да ауыл халҡы яҙғы ҡояш сағылыуындай шатланып ҡабул итте.

**Шулай итеп...**

**Һүҙебеҙҙе журналистарҙың иғтибарын тартып тороусы ауылдар хаҡында әйтеп башлағайныҡ. "Киске Өфө" гәзите редакцияһы Дәүләкән районы Мәкәш ауылының ошо исемлеккә инеүен үҙ тәжриәбәһендә белә хәҙер: был ауылда, ысынлап та, гәзит, китап һүҙен һанлаған халыҡ йәшәй. Ошондай төбәктәрҙең ишәйеүенә өмөт итәйек!**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# Байрам беҙҙә!

**Баш ҡалала йылдағыса Беренсе Май байрамына арналған төрлө мәҙәни саралар үткәрелә.** Улар быйыл 29 апрелдә уҡ башлана. Был көндә В. Комаров исемендәге Балалар ижады һарайында заман хореографияһы фестивале, Химиктар мәҙәниәт һарайында "Дуҫлыҡ хороводы" байрамы үтә. Гәҙәттәгесә, 1 майҙа баш ҡаланың бөтөн ял парктарында ла яҙғы-йәйге сезон асыла. Мәҫәлән, И. Якутов исемендәге ял паркында "Һаумы, парк" исемле балалар байрамы үтһә, "Ҡашҡаҙан" паркында хәрби-патриотик клубтарҙың спартакиадаһы була. Калинин районы халҡы өсөн ял байрамы Моторҙар эшләү мәҙәниәт һарайы алдында уҙғарыласаҡ. Бында уҡыусылар араһында еңел атлетика буйынса кросс була.

Дим районы ял паркында "Тыныслыҡ! Хеҙмәт! Май!" исемле концерт программаһы күрһәтеләсәк. Беренсе Май исемендәге мәҙәниәт һарайы алдында уҡыусылар һәм хеҙмәт коллективтары араһында еңел атлетика буйынса эстафета һәм кросс ярыштары була. Шулай уҡ В. Комаров исемендәге Балалар ижады йортонда "Бәхетле баласаҡ" исемле балалар ижады күргәҙмәһе асыла һәм 12 майға тиклем дауам итә. Һәр урында ла сауҙа нөктәләре эшләйәсәк.

*БАШ ҠАЛА ҠУНАҒЫ*

# Сәбәләнмәйенсә,

## аҡыл менән йәшәйһегеҙ

**"Ҡунаҡ әҙ ултыра, күп һынай", тигән әйтемде иҫәпкә алып, Түмән өлкәһенән килгән Өфө ҡунағы Рафаэль Ғәлимйән улы ҒӘДИЕВтан баш ҡала тураһындағы тәьҫораттарын һораштыҡ. Ул Түмән өлкәһе Мәғарифты үҫтереү институтында эшләй, доцент, педагогия фәндәре кандидаты.**

- Өфөнө күреү теләгем ҙур булһа ла, гел генә юл ыңғайы һуғылырға тура килә торғайны. Дөрөҫөн әйткәндә, баш ҡалағыҙҙы "Өфө ҡалаһы ни өсөн матур?" йыры аша ғына белә инем. Был юлы оҙағыраҡ булырға һәм күберәк күрергә насип булды. Ҡала үҙенең ҙурлығы, бер килеүҙә генә күреп бөтә алмаҫлыҡ киң ҡоласы менән әсир итте. Өфөнөң үҙенә хас аңлатып бөтә алмаҫлыҡ ниндәйҙер тәьҫир көсө бар. Башҡорт халҡына хас булған тыныс холоҡ баш ҡалағыҙға ла күскән, буғай. Мәҫәлән, Түмәндә тормош ритмы көслөрәк һымаҡ, бында иһә, бөтөн нәмә ашыҡмай, уйлап, килеһе быуаттарға етерлек итеп эшләнә кеүек. Урал тауҙарының сабыр киңлеге, башҡорт халҡының итәғәтлеге, кунаҡсыллығы, эскерһеҙлеге һиҙелә бында. Һис тә генә лә сәбәләнмәйенсә, аҡыл менән йәшәйһегеҙ. Был бигерәк тә кешеләрҙең үҙара мөнәсәбәтендә сағыла.

Максатым - Башҡортостанда музыка сәнғәтенең, мәҙәниәтенең үҙенсәлектәрен өйрәнеү, тәжрибә уртаҡлашыу булды. Баш ҡалағыҙҙа, ғөмүмән, республикағыҙҙа күп милләтле халыҡ йәшәүе тураһында электән хәбәрҙармын. Бына ошондай шарттарҙа нисек итеп төрлө милләт үҙенсәлектәрен һаҡлау менән бергә, төп халыҡтың да асылын юғалтмау ҡыҙыҡһындыра мине. Килеүем бушҡа булманы, бәхеттән, Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институтының уҡытыусыһы Рида Хәби ҡыҙы Хәсәйенова нәҡ ошо йүнәлеш буйынса яңы программа төҙөгән икән. Уны бөгөндән Рәсәй Федерацияһының башҡа күп милләтле төбәктәренә үрнәк итеп тәҡдим итергә була. Мин Татарстанда йыш булам. Унда, мәҫәлән, дәреслектәр фәҡәт татар мәктәптәре һәм гимназияларҙы өсөн генә тәғәйен сығарыла. Башҡортостандар башҡа йүнәлеш буйынса киткән: бындағы программаларҙа, дәреслектәрҙә, дидактик материалдарҙа күп милләтлек иҫәпкә алына. Ғөмүмән, Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институты нигеҙендә бик күп фәһемле тәжрибә емештәрен табырға, өйрәнергә, үҙләштерергә була. Бында мин үҙемә фекерҙәш бик яҡшы дуҫтар таптым. Ҡурай моңо тәржемәһеҙ ҙә аңлашылған кеүек, киләсәктә лә беҙ бер-беребеҙҙе күңелебеҙ менән аңларбыҙ, бәйләнеш дауам итер, тип уйлайым.

**Хөснөтдин ШӘЙХИН.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

☑ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы кәңәшмәлә ҡулланыусылар хоҡуғын яклау бүлеге начальнигы С. Ғәлиеваның мәғлүмәте тыңланды. Билдәләнелеүенсә, быltыр граждандарҙың сауҙа, көнкүреш хеҙмәте предприятиелары, торлак-коммуналь хужалыҡ эшмәкәрлегенә ялыу менән мөрәжәғәт итеүҙәре 2001 йыл менән сағыштырғанда 5 тапҡырға артҡан.

☑ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев Өфө ҡалаһында Рәсәй, Салауат Юлаев һәм Ҡала көндәрен уҙғарыу, балаларҙың йәйге ялын Бөйөк Еңеүҙең 62 йыллығына арналған саралар ойоштороу һәм"Грамоталы ҡала - II" конкурсын үткәреү тураһында ҡарар ҡабул итте.

☑ Өфөләге 2-се педагогия колледжы РФ Дәүләт Думаһының мәғариф һәм фән буйынса комитетының һәм "Интеграция" Рәсәй йәштәренең инновацион, ижади һәм ғилми эшмәкәрлеген үҫтереү милли системаһының дипломына лайыҡ булды.

☑ Өфө ҡала округы хакимиәтенең Торлаҡ хужалығы идаралығы ҡала халҡына ихаталарҙы таҙартыу ғына түгел, ағас ултыртыу тәҡдимен дә индерҙе. Үҫентеләр һорап идаралыҡҡа мөрәжәғәт итергә мөмкин.

☑ 1 майҙан алып ҡала яны маршурттарындағы тимер юл транспортында берҙәм социаль билеттар буйынса йөрөргә мөмкин буласаҡ. 200 һумлыҡ юл йөрөү документы пассажирҙар транспортының барлыҡ төрҙәренә тиерлек ҡағыла.

☑ 4 майҙа "Ростелеком" Республика ветерандар советы менән берлектә мәрхәмәтлек акцияһы ойоштора.

☑ Бөгөн 12 сәғәттә Машина эшләүселәр мәҙәниәт һарайында Өфө ҡала округы хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты йәштәр өсөн вакансиялар йәрминкәһе үткәрә.

☑ Өфө дәүләт циркы артындағы майҙанда 5 майҙа иртәнге 10-дан 17 сәғәткә тиклем машиналы фигуралы йөрөтөү буйынса ҡала ярыштары үтәсәк.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ЙОЛАЛАР ЙОЛАЛЫ ЕРҘӘ ТЫУА,

## йәки әбйәлилдәрҙең тағы бер байрам уйлап сығарғаны

**(Башы 1-се биттә).**

Киң ҡолас, ҡунаҡсыллыҡ, ихласлыҡ һәм юғары рух күтәренкелеге менән һуғарылған бындай сара быға тиклем Әбйәлилдә генә түгел, республикабыҙҙың башҡа төбәктәрендә лә булмағандыр. Ҡыштың ыжғыр һыуыҡ көндәрендә башланып киткән фестиваль ай ярымда районның 16 биләмәһе аша үтеп, туҡһанға яҡын ауыл халҡын дәррәү аяҡҡа баҫтырып, яҙҙың йәмле бер көнөндә тамамланды. Ай ярым буйына район халҡы биләмәләре, эстафета вымпелын күршеһенән-күршеһенә тапшырып, бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөштө.

Әйтергә кәрәк, фестиваль ниндәйҙер бер дөйөмләштерелгән ҡалып буйынса бармакостҡ (Хәйер, яңы башланғыстың ниндәй ҡалыбы булһын!). Эстафетаны бер-береһенә тапшырғанда урындағы халыҡ ҡунаҡтарҙы тик үҙенсә ҡаршы алырға, ниндәй ҙә булһа яңылыҡ, үҙенсәлек индереп, йолаға әүелерҙәй сараны йәнләндереп ебәрергә тырышты. Сара барышында ҡунаҡтарҙы күпселектә ҡатын-ҡыҙҙарҙан торған фольклор ансамблдәре ҡаршы алһа, Ҡырҙас ауылында, мәҫәлән, ҡунаҡтарҙы ҡаршы алырға олпат, дәрәжәле, үҙ баһаһын белгән ирҙәр сыҡты. Әйтерһең дә, юл сатында ете ырыу бейе баҫып тора ине! Ташбулаттар балаларҙан теҙеп ҡуйып, "тере коридор" менән ҡаршы алды. Дәүләттәр уларҙан да уҙҙырып ебәрҙе: "тере коридор" ҡунаҡтар үтергә тейешле бөтөн урамдарҙың буйынан-буйына теҙелгәйне. Һәр биләмәлә лә ҡунаҡтарҙы рус, башҡорт милли кейемендәге һыбайлы ҡыҙҙар, егеттәр ҡаршы алды, сос үҫмерҙәр парлап егелгән аттарҙа ҡунаҡтарҙы оҙатып йөрөнө. Башҡортостан һәм Рәсәй флагтарын тотоп йүгереүсе спортсылар сараның сәләмәт йәшәү рәүешенә лә бағышланыуына ишараланы. Ҡулдарына шарҙар, сәскәләр тотҡан кескәйҙәр ҙә байрамдан ситтә ҡалманы. Улар үҙҙәре үк байрам ине! Ә инде аш-һыуҙың төрлөлөгө, зауыҡлығы тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Бишбармаҡ, ҡаҙы-ял, тултырма, ҡорот кеүек башҡорт милли ризыҡтары менән бер рәттән, рус кухняһының салоһы, кәбеҫтәле аштары - барыһы ла булды. Гусев ауыл биләмәһендә ҡунаҡтарҙы украин аш-һыуы менән дә һыйланылар хатта. Бешерелгән-төшөрөлгән тәм-том тәҡдим иткән хужабикәләрҙең оҫталығына хайран ҡалырлыҡ ине. Шунан, насар йәшәйбеҙ, заманалар ауыр, тип әйтеп ҡара...







Шулай ҙа, фестивалдең иң төп өлөшөн Шәжәрә байрамы алып торҙо. Район сиктәрендә йәшәгән биш ырыу вәкилдәре үҙҙәренең иң абруйлыларын был бәйгегә сығарҙы. Мәҫәлән, Ишҡол ауылынан - Ҡаһармановтар, Асҡарҙан - данлыҡлы Мирхәйҙәровтар, Таштимерҙән - айыуҙар араһы нәҫеленә ингән Хызыровтар, 16 быуын ата-бабаһы тарихын яттан белгән Осокиндар, Үтәгәндән - 17 быуынын хәтерләгән Йәһүҙиндар, Әбделғәзенән - сәсән Шафиҡ-Тамьяни вариҫтары булған Әминевтар үҙҙәренең данлыҡлы үткәндәре тураһында бәйән итте. Шәжәрәләр ниндәй генә рәүештә эшләнмәгән ине: нәҫел ағасы итеп тә, стенд формаһында ла. Хатта, бөтөн ауыл тарихын сағылдырып эшләнгәне лә булды. Хәмит ауылынан Зәйнишевтар шәжәрәләрен сәхнәләштереп күрһәтте һәм еңеүсе тип табылды.

Фестиваль-эстафета барышында бик күп оҫта-оҫтабикәләр ҡул эшенә маһирлығын күрһәтеп, билдәлелек яуланы. Ишкилденән Зариповтарҙың сәскәле сигеүҙәре, Күсемдән апалы-һеңлеле уҡытыусы-ветерандар Тамара Филатова менән Анна Дмитриеваларҙың ҡулдан сигелгән келәмдәре, рамға ултыртылғын сигеүле картиналары, Әхмәттән Миләүшә Фазуллина һуҡҡан балаҫ-келәмдәр, Әбйәлил ҡасабаһынан хеҙмәт ветераны Мәхмүзә Ғилманованың сигелгән келәмдәре ысын мәғәнәһендә сәнғәт емештәре. Ир-ат та ҡалышманы: ағастан, тимерҙән эшләнгән, семәрләп биҙәлгән һандыҡтар, мебель кәрәк-яраҡтары, балсыҡ-туҙҙан эшләнгән аш-һыу һауыттары, талдан үрелгән ситәүкәләр - барыһы ла күҙ яуын алырлыҡ булды. Бигерәк тә Хәмит ауылы биләмәһе күргәҙмәһе ауыл кешеләренең йәшәү рәүешен сағылдырыуы менән башҡаларҙан айырылып торҙо. Бында солоҡ умарталарынан башлап, ағастан яһалған көбөләр, ағас саналар, тәҙрә рамдары, ситәүкәләр һәм башҡа шуның кеүек көнкүреш әйберҙәре бар ине. Хатта сыйырсыҡ ояларын да оҫта ҡуллылар айырым зауыҡ менән эшләгән. Исхаҡ ауылынан Зөлфиә Мәхийәнованың үҙе эшләгән дарыуҙары, Хәмиттән Рәйсә Мансурованың суҡлы кешәмир шәлдәре, Сәлим Баһауетдиновтың солоҡсолоҡ кәрәк-ярағы, Боранғолдан Мәйсәрә Тайыпованың бәйләмдәре, Күсемдән Хафиза Баязитованың шәхси музейы ла иғтибарҙы йәлеп итте. Әб-делғәзенән Ғәшүрә Әбүбәкерованың күҙ яуын алып торған ҡорамалары үҙе генә ни тора!

Байрам осоронда сәхнәгә сығып, үҙ һөнәрен күрһәтергә теләүселәр шул тиклем күп булды: ҡайһы бер урындарҙа жюри ағзалары 5-6 сәғәт буйына тамаша ҡылып, һәр сығышҡа баһа бирергә мәжбүр булды. Исемдәре районда ғына түгел, республикала ла киң билдәле профессиональ йырсы-бейеүселәр менән бер ҡатарҙан, һәүәҫкәрҙәр ҙә, сәхнәгә тәү тапҡыр аяҡ баҫыусылар ҙа булды.

Бынан тыш, фестиваль-эстафетала райондың спорт буйынса бөтә ҡаҙаныштары ла күрһәтелде. Хатта исеме республика сиктәрен сығып, Рәсәй кимәленә күтәрелгән донъя чемпионы Оксана Йомағолованың косикэ-каратэ буйынса күрһәтмә күнекмәләрен күреп тә, хайран ҡалдыҡ. Ҡыҫҡаһы, фестивалдән бер кем дә ситтә ҡалманы. Баҡтиһәң, халыҡ нәҡ ошондай халыҡ байрамдарына һыуһаған икән. Шуғалыр ҙа, ауыл халҡы һәр урында ла бер-береһен уҙҙырып, сәмләнеп, дәртләнеп, ярышҡа ынтылды. Ай ярым буйы халыҡ теленән төшмәгән фестиваль район үҙәгендә старт алып, иң төпкөл ауыл - Хәмиттә тамамланды. Был сара әбйәлилдәр күңелендә бик оҙаҡ һаҡланыр, әлбиттә. Уның еңеүселәре лә, еңелеүселәре лә юҡ - күңелендә дәрт-дарманы, сәмғәме булған, йөрәгендә ялҡын йөрөткән, милләтем, тип, тормош уртаһында ҡайнап йәшәгән, тормошҡа битараф булмаған һәр кем был был байрамдан үҙенә рух ныҡлығы, яңы көс алды.

**Мәҙинә ЙӘҒӘФӘРОВА,**
Әбйәлил районы.

## Б Ә Л Ә К Ә Й   Ҡ А М У С

### БЕЛМӘҺӘҢ-БЕЛ



### Аждаһа башняһы

Ошо яман исем бирелгән был ғәжәйеп ҙур таш ҡая Америкалағы үҙенсәлекле формалы тиҫтәләгән ҡаяларҙың береһе. 1906 йылда американдар уның һүрәте аҫтына "АҠШ-тың беренсе милли ҡомартҡыһы" тип яҙып, почта маркаһы ла сығара. Тәбиғәт мөғжизәһе булған ҡаяны күрер өсөн тәүҙә илдең Көньяҡ Дакота штатындағы Рапид-Сити ҡалаһына килеп, 2207 метр бейеклегендәге Блэк-Хилс тауының бер нисә үҙәнен артылырға кәрәк. Бындағы гранит ҡаялар бөтөн донъя туристарына яҡшы таныш, сөнки граниттарҙа 6 метр ҙурлыҡта Американың күренекле дүрт президенты Дж. Вашингтон, Т Джефферсон, А. Линкольн һәм Т. Рузвельттың башы уйыла.

Блэк-Хилс тауы теҙмәһенең ҡап уртаһында бейеклеге 200, диаметры 240 метр ҙурлыҡта Аждаһа тип исемләнгән ғәжәйеп ҙур ҡая ҡалҡып сыға. Уның тип-тигеҙ түбәһе диңгеҙ кимәленән 1560 метрға бейеклектә. Таш тирәләй йәшеллек һәм хайуандар донъяһы ярлы булғанлыҡтан, бында



тәбиғәт һәр саҡ толҡаһыҙ, күңелгә шом һала. Ҡеүәтле таштың ярыҡтары линейка менән һыҙған кеүек "дөрөҫ" һәм оҙонлоғо ла бер тигеҙ булыуы менән иғтибарҙы йәлеп итә. Нигеҙе биш ҡанатлы йондоҙ кеүек, бейеккә күтәрелгән һайын ослая барған таш бағаналар ҙа, дауылдарға бирешмәгәс, формаһын юғалтмай.

Аждаһа ҡаяһы үҙенең эргәһендәге тауҙарҙан айырмалы, буҙ массаһын ялан шпатының эре аҡ кристалдары тәшкил иткән магматик фонолит порфирҙан барлыҡҡа килеүе менән дә белгестәрҙе хайран итә. Ләкин уның нисек барлыҡҡа килеүен генә ғалимдар иҫбат итә алғаны юҡ. Ҡайһы бер тикшеренеүселәрҙең Аждаһа ҡаяһы ер аҫтынан бөрккән тау тоҡомоноң кире төшөп, вулкандың ауыҙын ҡаплап өйөлөүҙән барлыҡҡа килгән, тигән фаразы ла бар.

***✓ Башҡорттар Рәсәйгә үҙ ирке менән ҡушылған, тигән һығымтаға төплө килер өсөн бары тик шәжәрәләргә таяныу аҙ. Шундай фаразды өҫтәмә дәлилдәр менән тулыландырырға һәм уны ғилми асыш кимәленә күтәрергә кәрәк.***

**Аңлатма:**

Һарытау, Һамар өлкәләренә урыҫ крәҫтиәндәрен көсләп килтереп ултырта башлағас, Табын волосы башҡорттары үҙҙәренең ерен һаҡлап ҡалыу маҡсатында батшалыҡҡа мөрәжәғәт итеп, элекке грамоталарға таянып, ҡайтанан грамота ала. Документта Табын волосы башҡорттары Баҡый Сирмешевтың ере тейелгеһеҙ булыуы хаҡында әйтелә. Грамотала Баҡый Сирмешевтың батша алдындағы намыҫлы хеҙмәт итеүе, яһаҡты үҙ ваҡытында түләүе бәйән ителә. Грамотаны батша Федор Алексеевич биргән һәм уның писары Йософ Ҡаскилдин ҡул ҡуйған.

**Алтынсы документ:**

**Батша Петр Алексеевичтың Өфө өйәҙендәге барлыҡ даруға башҡорттарына биргән һаҡлыҡ грамотаһы. 1695 йыл.**



**Аңлатма:**

Ҡазан, Уса, Себер һәм Нуғай даруғалары башҡорттары Тләү Бифәнәшев, Ҡармай Бикбов, Ишек Ишкилдеев, Ҡырсыр Килмәков 1695 йылда батша Петр Алексеевичҡа барып, уларҙың ерҙәренә күсеп ултырыусы рус, татар, сыуаш һәм сирмеш крәҫтиәндәренең уларҙың йәйләү ерҙәрен ҡыҫырыҡлауы, һунар итергә, балыҡ тоторға мөмкинлек бирмәүе, сабынлыҡтарын тапауҙары хаҡында хәбәр итә. Петр Алекссевич Өфө воеводаһы Дмитрий Никитич Головинға аҫаба башҡорттарҙың хоҡуҡтарын һаҡлау буйынса саралар күрергә бойора һәм был хаҡта барлыҡ даруға башҡорттарының аҫабалығын раҫлаған һаҡлыҡ грамотаһы яҙып бирә.

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Был документтар барыһы ла XVII быуатҡа ҡарай. 1649 йылғы Собор уложениеһының бер статьяһы бар. Унда башҡорт ерҙәрен арендаға биреү, һатыу һәм һатып алыу ҡырҡа тыйыла. Юридик яҡтан ҡарағанда, Собор башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғын яҡлап сыға. Тап шул йылдарҙа Волга һәм Кама яғынан крәҫтиән колонизацияһы башлана. Батшаға барған башҡорттар Собор уложениеһына түгел, бер быуат элек Иван Грозный биргән грамоталарға таяна. Улар Аҡ батша биргән грамотағы аҫабалыҡ хоҡуғы һаҡланыуын талап итә. Төрлө йылдарҙа хакимлыҡ иткән төрлө батшалар төп грамоталарҙы нигеҙ итеп алып, һаҡлау грамоталары (оберегательные грамоты) яҙып бирә.**

**Үкенескә ҡаршы, төп грамоталар һаҡланмаған. Һәр хәлдә, архивтарҙа улар юҡ. Шулай ҙа төп документтар һаҡланмаһа ла, уларға таянып яҙылғандары юридик яҡтан тәүгеләренең эстәлеген тулыһынса бирә. Грамоталарға һәр осраҡта ла батша ҡул ҡуймаған, быны писарҙар эшләгән, ә инде документтарҙың исемдәре батша исеменән, тип атҡарылған.**

**Башҡорттарҙың Иван Грозный биргән грамоталарҙы тотоп, батшаға йөрөүҙәрен ергә аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлап ҡалыу өсөн алып барған сәйәси көрәше тип атарға була. Аҙаҡтан инде килешеү мөмкинлектәре ҡалмай башлағас, батырҙарыбыҙ атҡа атлана һәм ҡулына ҡорал ала. Артабан бар Рәсәйҙе тетрәткән башҡорт ихтилалдары башлана.**



биргән һаҡлау грамотаһы йөкмәткеһенән һәм XVI быуат аҙағында урыҫ миссионерҙары Трифон Вятский яҙған "Житие Трифона Вятского" тигән ҡиссанан иң төньяҡ ғәйнәләр тураһында беҙгә билдәле тарихи бихисап мәғлүмәттәр, Урта Кама ерендәге Ыйыҡ тауҙарының мифологик көсө һәм тағы әллә күпме дәлилдәр шул хаҡта раҫлай: башҡорт халҡының Рәсәй составына ингән осорҙа ғәйнәләрҙең ер биләмәләре Кама буйлап меридиан йүнәлешендә һуҙылған булған. Ул биләмәләрҙең төньяҡ сиген Чусовая йылғаһының түбәнге ағымы, ә көньяҡ сиген Зәй Катун ҡалаһы (Пициганиҙар картаһында - Сакетим) яҡтары тәшкил иткән. Эйе, биләмәләр бик ҙур булған. Йәнә шуны әйтеп китеү мөһим: был гигант ареалдың көньяҡ - көнбайыш өлөшөндә абориген булараҡ донья көтөүсе йәнәй ырыуы башҡорттары ла - ғәйнәләр. Асыҡлауымса, йәнәй һәм ғәйнә терминдары - тиңдәштәр.

11. Ғәйнә ҡәбиләһе Рәсәйгә ҡушылмаҫтан элек Ҡазан ханлығының составында көн иткән. Тарихыбыҙҙың был асыҡланмаған хаҡиҡәтенә мин бер тарихи документҡа байҡау яһап төшөндөм: ғәйнәләр 1791 йылда Пермь наместничествоһы исеменә үтенес хаты яҙа. Ҡомһоҙ Строгановтан аҫаба ерҙәрҙе ҡурсалап ҡалыу маҡсатынан яҙылған был документта ошолар хаҡында әйтелеп кителә: Мол ерендә (Мол - Камаға ҡойған йылға) ғәйнәләр борон замандан бирле йәшәй. Әүәл улар яһаҡты Ҡыпсаҡ батшаларына, һуңынан - Ҡазан ханлыҡтарына түләгән (йәғни Алтын Урҙа хандарына).

12. Ҡазан ханы Сәхип-Гәрәй 1523 йылда Ирәкте улысы башҡорто Шәйех-Әхмәткә тарханлыҡ титулы биргәне фәнгә яҡшы мәғлүм. Тимәк, был ырыуҙың да тарихы Ҡазан ханлығы менән туранан-тура бәйле.

13. Иван Грозный сардары Андрей Курбский полктары 1554 йылдың ҡышын Ҡазан ханлығының көнсығыш биләмәләрен үтә. Аҙаҡ А. Курбский был турала ошолай тип яҙа: "... понеже хождаху за ними (за мятежными бисермянами - Р.И.) месяц целый, а передние полки наши гоняху за ними аж за Уржум и Мет (Вятка - Р.И.) реку за леса великие, и оттуду до башкирска языка, аж по Каме реке вверх ко Сибири протязается. И что их было осталося, то покоришася нам" (Русская историческая библиотека, т.21, 1914, стб. 218). Был өҙөктән А. Курбскийҙың полктары ғәйнә ерендә лә булып китеүе аңлашыла. Тимәк, ғәйнәләр Рәсәйгә үҙ ирке менән ҡушылмаған булып сыға - уларҙы буйһондорғандар.

14. Йәнә шуға иғтибар итеү мотлаҡ: Ҡазан ханлығын тар-мар итеү тураһындағы тәү сығанаҡтарҙың күпселегендә, шул иҫәптән кенәз Андрей Курбскийҙың яҙмаларында Ҡазан ханлығы халҡының этник атамаһы - бисермән. Ә бисермән этнонимы, фәнни тикшеренеүҙәрем күрһәтеүенсә, башҡорт лексик берәмегенең тарихи бер варианты булып сыҡты (ул турала ҡарағыҙ: Р. Исламшин, "Ыйыҡ тауҙар илендә", Өфө, 2006, 89 - 90 биттәр). Ошонан сығып һығымта яһарға мөмкин: беҙҙең төньяҡ башҡорттарыбыҙ - Үрге Кама, Үрге Вятка бисермәндәре!

15. Бисермән һүҙенең этимологияһынан (бисермән өбөйәс ырыуы кешеһе - буҙ ырыуы кешеһе - басғир кешеһе - башҡорт) шул күренә: Ҡазан ханлығының төп халҡын башҡорттар тәшкил иткән. Ханлыҡтың төп этносынан айырмалы рәүештә, Нуғай Урҙаһы башҡорттары Рәсәйгә үҙ ирке менән ҡушыла.

Әлегә тиклем тарих фәнендә был фекер бары бер-нисә шәжәрәгә генә (Ҡыпсаҡ, Бөрйән, Үҫәргән, Тамьян) нигеҙләнгәйне. Әлбиттә, башҡорттар Рәсәйгә үҙ ирке менән ҡушылған, тигән һығымтаға төплө килер өсөн бары тик шәжәрәләргә таяныу аҙ. Шуға күрә бынан күп йылдар элек үҙ алдыма шундай бурыс ҡуйҙым: башҡорттар Рәсәйгә үҙ ирке менән ҡушылған, тигән фаразды өҫтәмә дәлилдәр менән тулыландырырға һәм уны ғилми асыш кимәленә күтәрергә кәрәк.

Шул юҫыҡта эшләй башлағас уҡ, бер нәмә иғтибарымды үҙенә тартты: башҡорттарҙың аҫаба ерҙәре тураһындағы документтарҙа (һүҙ XIX быуат башында яҙылған сығанаҡтар тураһында бара) Урал йылғаһы бассейны һәм үрге Ағиҙел ере элек тулыһынса тиерлек биш башҡорт ырыуының -Үҫәргән, Бөрйән, Тамьян, Ҡыпсаҡ һәм Түңгәүер ырыуҙарының уртаҡ биләмәһе булып һаналған. Ә ниңә улар дүрт кенә ырыуҙың түгел, бишәүҙеке булған? Әлбиттә, мин бында юҡҡа ғына дүрт һанына баҫым яһамайым. Үрҙә әйтелгән шәжәрәләр беҙгә Бөйөк ваҡыттың алыҫта ҡалған быуаттарынан ошоларҙы хәбәр итә: 1557 йылда йыраҡ сәфәргә дүрт бей юллана - Үҫәргән ырыуынан Бикбау бей, Тамьяндан - Шәғәли Шаҡман бей, Бөрйәндән - Иҫке (Иҫәкәй) бей, Ҡыпсаҡтан - Ҡарағужаҡ бей. Ә ниңә улар дүртәү генә? Ниңә улар менән бергә Түңгәүер ырыуы башлығы бармай ҡалған? Нәҡ ошо һорау мине асышҡа илтте: 1557 йылда Аҡ батшаға баш һалғанда, төп һүҙҙе, шулай ҙа Түңгәүер ырыуы башҡорто әйткән, ә ул кеше - 1555 йылда Нуғай Урҙаһының, йәғни Эске Башҡорт иленең ханы итеп иғлан ителгән Исмаил бей! Исмаил бей элекке хан - Түңгәүер башҡорто Йософ яуҙа һәләк булғас, тәхеткә ултыра.

Көньяҡ башҡорттар дәүләтен дипломатик һөйләшеүҙәр аша Рәсәйгә ҡушҡан хан Исмаил - тарихи бөйөк шәхесебеҙ Иҙеүкәйҙең нәҫел-нәсәбенән. Уның шәжәрәһе Иҙеүкәй шәжәрәһенә ошо тәртиптә барып тоташа: Исмаилдың атаһы - Муса, Мусаның атаһы - Вәккәс, Вәккәстең атаһы - Мораҙым, Мораҙымдың атаһы - Иҙеүкәй.

**Рауил ИСЛАМШИН.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# Көнләшеп,

## бер-берегеҙҙең абруйын төшөрмәгеҙ

**Ғаиләнең именлеген, абруйын һаҡлау - ирҙең бурысы. Шуға ла өйләнгән саҡта ул буласаҡ ҡатынының ҡылыҡ-фиғеленә ныҡ иғтибар итергә тейеш. Пәйғәмбәрҙең бер хәҙисендә "Ир - үҙ ғаиләһенең бағыусыһы, һәм ул һәр ғаилә ағзаһы өсөн хәстәрлек күрергә бурыслы", тиелә. Тимәк, ҡатынының һәм балаларының ҡылыныш-тәртибе өсөн ир яуап бирә.**

✓Әммә был уның шикләнеүҙәрен аҡламай. Хәстәрлек күреүсе ир, ҡабул ителгән сиктәрҙе үтеп, ҡатынын бер нәмәлә лә нигеҙһеҙ ғәйепләргә тейеш түгел. Динһеҙ ҡатын теләһә ҡайһы ваҡытта, төрлөсә сәбәп табып, күҙ уңынан ысҡынырға мөмкин. Әл-Ғәзиз әйтеүенсә: "Ул - һеҙҙең хөсөтлөгөгөҙҙән, аҫтыртын уйҙарығыҙҙан, ысынында, хөсөтлөгөгөҙ бөйөк һеҙҙең!"

✓Бәйғәмбәр иргә ҡатынының тәртибен һәр саҡ иғтибар үҙәгендә тоторға кәңәш иткән. "Үҙенең ата-әсәһен хөрмәт итмәүселәр, ғаилә ағзаларының тәртипһеҙ ҡылыҡтарына битараф ҡалған ирҙәр һәм ир-атҡа тиңләшкән ҡатындар ожмахҡа эләкмәйәсәк", тигән ул.

Шулай ҙа бәйғәмбәр ир кешенән көнләшеүҙә сама белеүҙе талап иткән. Бер хәҙистә: "Әгәр ҙә ҡатынының тәртибендә икеләнергә сәбәп юҡ икән, Бөйөк Аллаһы был ирҙе артыҡ көнләшеүҙән тыя", тиелә. Ир ҡатынын артыҡ әҙәрлекләй икән, башҡалар күңелендә был ҡатындың гонаһ ҡылыуына шик барлыҡҡа килеүе ихтимал. Йәнәһе, әгәр ул ҡатын шундай булмаһа, ире һәр аҙымын күҙәтеп тормаҫ ине.

✓Али ибн Аби Талиб фекеренсә: "Ҡатынығыҙҙы артыҡ көнләмәгеҙ, юғиһә, абруйын төшөрөрһөгөҙ". Аҡылды юйырлыҡ көнләшеү ир-егетте ҡатыны тураһында насар фекер йөрөтөүгә, уны ғәйепһеҙгә ғәйепләүгә алып килеүе мөмкин. Быны Ҡөрьән дә, Сөннә Бәйғәмбәр ҙә тыя. "Ҡатынының тоғролоғона икеләнгән иргә уны тикшереү өсөн төн уртаһында ҡайтып инеү рөхсәт ителмәй", тиелә хәҙистә.

✓Әл-Бохари менән Мөслим дә Бәйғәмбәрҙең ошондай һүҙҙәрен еткерә: "Әгәр ҙә ир өйөнә төн уртаһында ҡайта икән, иҫкәртмәйенсә инергә тейеш түгел. Ҡатыны сәстәрен тарап, уны ҡаршы алырға әҙерләнеп бөткәнсе көтөп торорға бурыслы".

**Шулай итеп, әгәр ҙә ир сама белеп кенә ҡатынын көнләй икән, был - ғәҙәти күренеш. Ныҡ көнләшкән ир өсөн иң яҡшыһы - ғәҙел һәм әхлаҡле ҡатын алыу. Нисек кенә булмаһын, ир менән ҡатын араһында һәр саҡ ышаныс булырға тейеш. Фәҡәт бер-береңә ышаныу ғына имен һәм татыу ғаиләнең нигеҙе була ала.**

*✓ Милли үҙаңы булмаған халыҡ - ул буш урын. Ҡуяндар тураһында йырҙы хәтерләйһегеҙме: "Ә беҙгә - барыбер! А нам все равно!" Ошо йырҙың һүҙҙәре бөгөн күптәрҙең тормош девизына әүерелде.*



ЙӘШТӘР ҠОРО

**Миллионлаған егет һәм ҡыҙ мәктәптәрҙә, училищеларҙа, техникумдарҙа, институттарҙа белем ала. Шуларҙың күбеһе белем усағы ишегенән ауыҙҙарына тәмәке ҡыҫтырып, ҡулдарына һыра шешәһе тотоп барып инә. Тәнәфестәрҙә 10-15 йәшлек үҫмерҙәр рекламаларҙа маҡталған "дөрөҫ һыра" һемерә. Бындай күренеш уҡытыусыларҙы ла, ата-әсәләрҙе лә шаҡ ҡатырмай бөгөн. Үкенескә ҡаршы! Тағы шуныһы аяныслы: наркоманлыҡ, хәмер, тәмәке, енси аҙғынлыҡты рекламалау - Рәсәй халыҡтарының генофондын юҡҡа сығарыу, икәнен һәр аңлы кеше яҡшы белә, бөгөн мәғлүмәти һуғыш алып барылыуын да аңлай. Күп атай-әсәй, бигерәк тә йәштәр, үҙҙәре лә быға күнекте, ҡул һелтәне, еңелде... Күптәр... Ләкин бөтәһе лә түгел! Еңелмәүселәр башҡорт йәштәре араһында ла бар : "Бәхәс ҡоро" рубрикаһында бөгөн тап ошондай бер төркөм ҡыҙҙар менән әңгәмә ҡорҙоҡ. Таныш булығыҙ: Әбйәлил йәштәре берлеге лидерҙары - Азалия ҒӘЛЛӘМОВА, Ләйсән НУРҒӘЛИНА һәм Венера БАЙМӨХӘМӘТОВА.**



Ләйсән



Азалия



Венера

**► Рәсәй Президентының Волга буйы округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Александр Коновалов 2007 йылды Волга буйы федераль округында Йәштәр йылы тип иғлан итте. Быйыл февраль башында иһә Дәүләт Думаһы депутаттары 2008 йылды Рәсәйҙә Йәштәр йылы тип билдәләргә һәм федераль кимәлдә йәштәр программаларын тормошҡа ашырыусы, ижтимағи ойошмаларҙың инициативаларын яйға һалыусы айырым идаралыҡ булдырырға, тип, Рәсәй Президенты В.В. Путинға мөрәжәғәт ҡабул итте. Был яҡшы тенденция, сөнки оҙаҡ йылдар йәштәргә иғтибар бүлмәү арҡаһында бихисап проблемалар хасил булды. Мәҫәлән, статистика һандары бөгөн йәштәрҙең ижтимағи тормошта әүҙем булмауын күрһәтә. Ҡыҙҙар, нисек уйлайһығыҙ, бындай һүлпәнлектең сәбәбе низә?**

# СИТЛЕККӘ ӨКӨНӨ ТҮГЕЛ,

## матур тауышлы ҡоштарҙы бикләйҙәр

**ЛӘЙСӘН:** Ситлеккә өкөләрҙе түгел, матур тауышлы ҡоштарҙы бикләйҙәр. Минеңсә, йәштәр әүҙем йәшәр ине лә, уларҙы "матур ҡоштар" итеп тәрбиәләп, махсус ижтимағи ситлектәргә бикләп бөткәндәр. Быының төп сәбәбе - донъя һәм Рәсәй "элита"һының үҙҙәрен алыштырырлыҡ быуын ҡалҡып сығыуын теләмәүендә. Ваҡытында цивилизациялар бәрелеше теорияһы авторы Хайдеггер Ницшеның халыҡ менән идара иткән көслөләр аристократияһы хаҡында фекерен эләктереп алып, сигетика (шымыу, өндәшмәү техникаһы) теорияһын күтәреп сыҡҡайны. Был ысул ярҙамында тәғәйен белемгә эйә булыусылар күпселек менән идара итә ала. Ә инде идара ителеүселәр араһында яңы элита (интеллигенция) төркөмдәре барлыҡҡа килмәһен өсөн уны тулыһынса шымлыҡҡа дусар итеү зарур. Элита иһә, үҙ сиратында, шым тороуҙы юғары баһалай һәм маҡсатына ирешеү өсөн аҡса йәлләмәй.

Йәштәрҙең һүлпәнлегенә ижтимағи идиотизм да ғәйепле. Идиотия, идиотизм төшөнсәләре, тәү сиратта, медик төшөнсә - наҙанлыҡты, тупаҫлыҡты аңлата. Ләкин был һүҙ менән медицина ғына эш итмәй. Кеше тупаҫ һәм мәғәнәһеҙ ҡыланһа, беҙ уны "үҙен идиот кеүек тота", тибеҙ. Ижтимағи идиотия иһә фекерләүҙең шаблондарға бойһоноуы тигәнде аңлата. Ундай шаблондар махсус булдырыла һәм миллионлаған кешеләрҙең аңына киң мәғлүмәт саралары һәм мәҙәниәт аша һеңдерелә. Бындай тенденция хөкөм һөргән саҡта "өлкән ағайҙар, етәкселәр минең өсөн барыһын да хәл итәсәк, уйланыу кәрәкмәй, мин - бәләкәй кеше", тигән фекер өҫтөнлөк итә. Шуға ла, белә-күрә ил менән йәмғиәт яҙмышы эштәренә ҡыҫылмау хөкөм һөрә бөгөн. Был ҡараш "мин бер кемгә лә ышанмайым"да сағыла. Эскелеккә, наркоманлыҡҡа бирелеп, кешелектән сығып, "тәгәрәп китһен донъяһы" принцибы менән йәшәү быға асыҡ миҫал. Ижтимағи идиотизм донъяға яңылыш, бер яҡлы, бер ҡатлы ҡарауҙан барлыҡҡа килә. Үҙ аҡылыбыҙға һәм намыҫыбыҙға таянып, бындай шаблондарҙы тәнҡит күҙлегенән үткәреп, ҡайтанан уйларға кәрәк. Йәштәр шунан һуң пассив булыу хаталы позиция икәнлеген аңлар.

**АЗАЛИЯ:** Күрәһең, беҙ "көтөү" рәүешендә йәшәп өйрәнгәнбеҙ. Эскеселек һаҙлығына батырып, иҫерек баш менән бер ни хаҡында ла уйланмаһын өсөн аҙым һайын оҫһоҙ ғына хаҡҡа хәмер диңгеҙе тәҡдим итеп, беҙҙе һарыҡ көтөүе кеүек "ҡурсалайҙар". Осһоҙ-ҡырыйһыҙ көндәлек мәшәҡәттәр һәм ғаилә проблемаларынан баш ҡалҡытмаһын һәм тирә-яҡта барған хәл-ваҡиғалар хаҡында уйланмаһын өсөн беҙҙе йәшәйештең төбөнә батыралар. Илебеҙгә "йомарт" рәүештә төрлө кредиттар бирәләр һәм һуңынан беҙҙең балалар менән ейәндәрҙән уларҙың юғары процентын ҡайтарыуын теләйҙәр. Үҙебеҙҙең ғүмер хаҡында уйланмаһын өсөн телевидениеның бар программаларында ла ят тормош тураһында сериалдар күрһәтәләр. Яңыса йәшәү өсөн нимә ҡамасаулай? Быуаттар буйы көнбайыш мәҙәниәте аша һеңдерелгән ҡолдар психологияһы һәм аҡыл ялҡаулығы ҡамаусалай беҙгә.

> ***Күрәһең, беҙ "көтөү" рәүешендә йәшәп өйрәнгәнбеҙ. Эскеселек һаҙлығына батырып, иҫерек баш менән бер ни хаҡында ла уйланмаһын өсөн аҙым һайын оҫһоҙ ғына хаҡҡа хәмер диңгеҙе тәҡдим итеп, беҙҙе һарыҡ көтөүе кеүек "ҡурсалайҙар". Осһоҙ-ҡырыйһыҙ көндәлек мәшәҡәттәр һәм ғаилә проблемаларынан баш ҡалҡытмаһын һәм тирә-яҡта барған хәл-ваҡиғалар хаҡында уйланмаһын өсөн беҙҙе йәшәйештең төбөнә батыралар. Илебеҙгә "йомарт" рәүештә төрлө кредиттар бирәләр һәм һуңынан беҙҙең балалар менән ейәндәрҙән уларҙың юғары процентын ҡайтарыуын теләйҙәр. Үҙебеҙҙең ғүмер хаҡында уйланмаһын өсөн телевидениеның бар программаларында ла ят тормош тураһында сериалдар күрһәтәләр.***

Тәгәрмәс эсендәге тейен һымаҡ матди байлыҡ артынан ҡыуып, "башҡаларҙан кәм булмаһын" өсөн йәшәп, беҙ бит үҙ көсөбөҙҙө йәлләмәйенсә, физик һәм психик яҡтан хәлдән тайғансы эшләйбеҙ. Әүҙемләшеү һәм яҡшы йәшәү өсөн беҙ иң тәүҙә эске мәшәҡәттәрҙән һәм аҡыл ялҡаулығынан арынырға тейешбеҙ.

**ВЕНЕРА:** Башҡортостанға күҙ һалғанда, республикала иң аҡсалы урындарҙа башҡорттар эшләй, тип әйтеп булмай. Ни өсөн? Милли үҙаңы булмаған халыҡ - ул буш урын. Ҡуяндар тураһында йырҙы хәтерләйһегеҙме: "Ә беҙгә - барыбер! А нам все равно!" Ошо йырҙың һүҙҙәре бөгөн күптәрҙең тормош девизына әүерелде. "Мин - бәләкәй кеше, мин барыбер бер нәмәне лә хәл итмәйем. Шуға ла был ижтимағи эштәргә ҡыҫылыуҙың фәтеүәһе юҡ. Үҙемде, ғаиләмде ҡайғыртырға, балаларҙы аяҡҡа баҫтырырға кәрәк. Алдан ҡысҡырып йөрөүселәр үҙ кеҫәләре, креслолары өсөн генә ҡайғыра, ябай халыҡ өсөн борсолмай" - күп кешеләрҙең ҡарашы ошолай хәҙер. Улар тирә-яҡта, илдә, донъяла барған хәл-ваҡиғаларҙы аңларға тырышмай, киләсәк тураһында уйланмай. Мәҫәлән, бөгөн бар халыҡ (ҡалалағы ла, ауылдағы ла) ярыша-ярыша кредит алырға кереште. Күптәр "кредит йөгө" тигән төшөнсәне аңларға ла теләмәй. Америка тикшеренеүселәре күптән ошондай асыш яһаны: бер-ике тиҫтә мең доллар бурыс өсөн кисергән стресс туғандар вафаты хаҡында хәбәр стресынан һуң икенсе урында тора. Хатта ғаилә тарҡалыуына ҡарағанда ла ҡурҡынысыраҡ ул. Мин, мәҫәлән, телевизорҙан йыш ҡабатланған 30 йыл буйы түләү хоҡуғы биргән ипотека тураһындағы рекламалағы "ипотека" һүҙен "кредит ҡоллоғо", йәки "30 йыл буйына бөтмәгән хроник стресс" һүҙе менән алыштырырға тәҡдим итер инем.

**► Йәшлек - хәҡиҡәт эҙләү осоро. Фекерҙәрҙең иң саф, иң уянған, иң төрлө сағы. Бөгөн иһә йәштәрҙең тәбиғи ынтылыштары күберәк сүп-сар канализацияһына түгелә. Үҙ-үҙен һәм ғәләмде өйрәнергә мөмкинлек тыуҙырған йәшлек "наҙанлығы" мейене йоҡлатыусы уйындар, мәшәҡәттәр ярҙамында ойотола. Иғтибарлыраҡ ҡарағанда, йәштәр мәсьәләһе бөгөн бар донъяның иң көнүҙәк мәсьәләһе икәнлеген аңларға мөмкин...**

**АЗАЛИЯ:** Донъяла быға сағыу миҫалдар етерлек. Иң яҡшы миҫал - АҠШ йәштәренең яҙмышы. Америка йәмғиәте өсөн йәштәр күптән иң ҙур баш ауырыуына әйләнде. Быының сәбәбе - Америка йәштәренең күңелендәге бушлыҡ. Был бушлыҡты бөгөн нәмә менән тултырырға белмәйҙәр. АҠШ ғалимдары уҙғарған бар ғилми эҙләнеүҙәр һөҙөмтә бирмәй. Йәштәрҙең ҡайһы берәүҙәре был бушлыҡты үҙен хәмер һаҙлығына батырып тултыра, икенселәре наркотиктан иҫереп, юҡҡа сыға - бушлыҡҡа юлыға һәм тирә-яҡҡа тағы ла ҙурыраҡ зыян килтерә. Ижтимағи проблемалар шулай ҡалҡып сыға. Зыялылар был бәләләрҙең сығанағы - яһиллыҡ һәм мәғариф өлкәһендәге етешһеҙлектәр булыуын асыҡтан-асыҡ әйтә. Эйе, мәғариф етешһеҙлектәре үҙ эҙемтәләрен тиҙ бирә. Быға дәлил итеп бер Америка сәйәсмәненең фекерен әйтеп китергә була: "Әгәр ҙә йәштәр белемле һәм әхлаҡле булһа, улар - хазина. Әхлаҡһеҙ һәм белемһеҙ булһа, уларҙың киләсәге ҡояш артынан боролған көнбағыш яҙмышынан айырылмай". Йәштәр яҙмышы кисә лә актуаль ине, бөгөн дә актуаль һәм иртәгә лә актуаль буласаҡ! Илдең һәм милләттең уяныуының, сәскә атыуының төп шарты - йәштәр проблемаларының юҡҡа сығыуы. Әгәр ҙә һәр бер кешенең киләсәге өсөн йәшлек иң мөһим осор булһа, милләт, ил киләсәге өсөн дә ул шул тиклем мөһим. Был юҫыҡта беҙҙең милләт йәштәре башҡаларға ҡарағанда күпкә отошлораҡ шарттарҙа йәшәй. Донъяның күп илдәрендә булмаған мөмкинлектәр бар беҙҙә. Мәҫәлән, статистика һандарына иғтибар иткәндә, беҙҙә йәштәр ярайһы уҡ күпселекте тәшкил итә. Әммә тенденция бөгөнгөсә дауам итһә, йәғни һәр ғаилә бер-ике генә бала тапһа, йә бөтөнләй тапмаһа, бер аҙҙан Көнбайыш Европа менән АҠШ йәмғиәте кеүек, башҡорт йәмғиәте лә ҡартаясаҡ. Күплеккә ирешкән осраҡта ла, сифатты яҡшыртыуҙы ла күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа кәрәк бит әле. Бер оло ағай миңә ошолай тине: "Йәш кеше бөгөн яңғыҙ ҡалды. Быуыла-ҡысҡыра илап, яңғыҙлыҡҡа дусар ителеп, бысранған һауаны һулай. Яңғыҙлыҡтың иң тетрәндергес, иң аяныс музыкаһын яҙа. Яңғыҙ булғанлыҡтан - шиғыр, яңғыҙ булғанлыҡтан - йыр, яңғыҙ булғанлыҡтан үлем яҙа. Йәш быуындың иң аяныс хәле был".

**ЛӘЙСӘН:** Азалия Америка йәмғиәте тураһында дөрөҫ әйтте. Бына, мәҫәлән, бер миҫал: быйыл 17 апрелдә Америкалағы Блексберг ҡалаһындағы сәйәсәт-технология университетында булған трагедия бар донъя халҡын шаҡ ҡатырҙы. Йәш егет һөйгәненә үс итеп, ҡулына ҡорал ала һәм университетҡа инеп, 32 кешене үлтерә, 30 кешене ауыр яралай. Һуңынан иһә үҙ-үҙенә ҡул һала. Күҙәтеүселәр билдәләүенсә, был Америка университеттары тарихында күпләп кеше үлтереүҙең иң ҡурҡыныс осрағы.

Киләсәктең яҙмышын алдынғы технологияларға хужа булыусылар түгел, ә ғаилә институтына иғтибар бүлгән милләттәр хәл итәсәге тураһында һөйләй. Ғаилә ҡороуға һәм балалар табыу мәсьәләһенә етди ҡарамаған, милли тәрбиә алымдары ярҙамында нәҫелдәренә йоғонто яһай алмаған милләттәр, бөгөн булмаһа, иртәгә, заман талаптарына яраҡлаша алмайынса, юҡҡа сығыуы ихтимал.

**ВЕНЕРА:** Италия социологтары тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, йәштәр слэнгы бөгөн биш йыл һайын алышынып тора. Йәштәр "слэнг"ы - ул үҙ-ара "беҙҙекке"ләрҙе "ят"тарҙан айырыу ҡоралы. Тимәк, ижтимағи-психологик юҫыҡтан ҡарағанда, һәр биш йыл һайын бер быуын алышына. Үҙгәртеп ҡороу осоронан 20 йыллап ваҡыт үтте, йәғни дүрт быуын йәштәре алышынып өлгөрҙө. Ошо дүрт быуын күңелендәге бушлыҡты тултырып өлгөрҙөмө икән? Уларҙың күпселеген юғалтманыҡмы? Әгәр ҙә йәмғиәт проблемалары нигеҙендә кешеләрҙең психикаһы менән әхлаҡ етешһеҙлектәре ятҡанын билдәләһәк һәм бөгөнгө йәмғиәт хәленә объектив баһа бирһәк, бушлыҡты тамаша-концерттарыбыҙ, поп-музыка, телейәшник, Голливуд кинолары, "етеш" тормош, заман техникаһы тултырыуы асыҡтан-асыҡ күренә. Әлбиттә, был фекер менән килешмәүселәр та-

***✓ Башҡорт арғымаҡһыҙ булмаҫ инде, ағай. Кейәүең өйләнгән саҡта уҡ, йәйәү йөрөтмәм, тип вәғәҙә иткәйне. Торҙо һүҙендә. Аҡсәскә иренә йылмайып ҡарап алды.***

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА**




**(Хикәйә)**

Морат байтаҡ ваҡыттар тыуған яҡтарында булманы. Тәүҙә өҫ-башын рәтләп алырға уйланы, унан өй бөтөрөргә кәрәк ине, шунан инде машина менән ҡайтырға хыялланды. Атаһы менән әсәһе килеп, донъяһын күреп ҡайтҡас, һағыныуы тағы баҫылып торҙо. Икенсе йылына ағаһы менән еңгәһенең юлы төштө. Шунан инде атаһы менән әсәһе бер-бер артлы ғына фанилыҡтан мәңгелеккә күскәс, ауылында өс кенә көн булды ла, ҡабат юлы төшмәне. Алтмышҡа аяҡ баҫҡас, һағыныу тойғоһо уғата көсәйә ти. Дөрөҫө лә шулдыр. "Юлдаш" каналынан йәш саҡтарындағы көй ишетелһә, йөрәге һулҡылдап-һулҡылдап ҡуйғылай башланы.

- Ҡайтып киләйек, кәләш, - тине бер көн ҡатынына. Йыш ҡына ҡабатлана торған был тәҡдимгә әллә ни аптырамаңы ҡатыны.

- Әйҙә һуң. Тыуған яҡтарыңды күреп килермен, исмаһам. Ирем Башкириянан булып та бер тапҡыр ҙа күргән юҡ, - тине лә, - туғандарыңдың күпме дебет шәлен һаттым, дебет кәзәһенең ниндәй икәнен дә белмәйем, - тип өҫтәп ҡуйҙы.

Ҡатынының шулай тиеүе Мораттың тәүәккәл уйҙарының теҙгенен тартып ҡуйҙы, уйға һалды. Ҡатынына нимә күрһәтер? Армияға киткән сағындағы ауылы бик үк маҡтанырлыҡ булманы. Урам тулы кәзәнән башҡа бер ни юҡ ине. Өйҙәрендә буй урындыҡ та, һандыҡ өҫтөнә өйөп ҡуйылған ҡаралты. Мебель тигәндең нимә икәнен дә белмәне ауылдаштары. Ҡыҙ балаларҙың шәл сите бәйләүҙән башы сыҡманы. Күпме шәл бәйләп ебәрә торғайнылар... Хатта Хрущев етәкселек иткән заманда, кәзәләрҙе бөтөргән осорҙа ла, ауылдаштары ни ғиллә менәндер һаҡлап алып ҡалғайнылар дебет кәзәләрен. Тик власҡа Брежнев килеп, "ауылдарҙы эреләтеү" башланғас ҡына, уларҙың мал аҫырау өсөн бик уңайлы урындағы ауылы ер йөҙөнән юҡ ителеп, туғандары тырым-тырағай таралышып бөттө. Хәҙер ниндәй кәсеп менән генә йәшәйҙәр икән?

- Ярай, кәләш, был юлы үҙем генә ҡайтайым. Юлдарға күҙ һалайым. Машина тәгәрмәсе ашалырлыҡ түгелме? Юл элеккесә булһа, самолет менән генә осорбоҙ. Ағайымдың балалары барыһы ла Өфөлә ти бит хәҙер. Тәүҙә үҙем генә ҡайтып, йәшәү-тороштарын байҡап киләйем әле, - тип, Морат юлға сыҡты.

Күстәнәскә кедр сәтләүектәре алды ("кулак" тип Себер яҡтарына ҡыуылған ҡартатаһы, әрбет сәтләүеге ҡотҡарҙы аслыҡтан, тип һөйләгәс, бөтөнөһөнөң дә ошо сәтләүекте тәмләп ҡарағыһы килгәйне), йорт-ҡураһын фотоға төшөрөп һалды. Йорто - уның ғорурлығы. Үҙ ҡулдары менән булдырҙы: олатаһынан отоп алғанса, бүрәнәләрҙең көньяҡҡа ҡараған яғын өйҙөң эс яғына, төньяҡҡа ҡарағанын - тыш яғына тура килтереп, ырып бураны үҙе күтәрҙе, кәсәк-тирәстәрен биҙәне, семәрләне. Тәүҙә ике ҡатлы тип уйлағайны, бер юлы өсәү итеп ҡуйҙы. Ағаһы менән еңгәһе килеп күргәс, иҫтәре китте. Ағаһы бүрәнә баштарынан ҡулсаларҙы ҡарап, ай-һай, ҡустым был хас олатайымса булған бит, мәңгелек итеп бурағанһың, тип маҡтаны. Төртмә телле еңгәһе генә: "Өсөгөҙ өс ҡатында ултырһағыҙ, телефон аша аралашырһығыҙ микән?" - тип шаяртып алды. Морат өйөн эс яҡлап та төшөрөп алды. Ни тиһәң дә, ҡала шарттары бит. Һыуы ла үткәрелгән, мебеле сит илдеке. Ихатаһында бынамын тигән мунса. Туғандары күрһендәр ағаһының донъяһын! Бүләккә үҙ ҡулдары менән һуҡҡан беләҙектәрен алды. Ә беләҙектәре матур ине. Ҡара алтын ялатылған көмөш һымаҡ. Шундай беләҙектәр менән байып киттеләр ҙә инде. Уныһы ла олатаһынан ҡалған оҫталыҡ. Ялтыратыуҙан ғына ҡурғаш көмөш була алмай, тиһәләр ҙә оҫта ҡулында була икән. Әлбиттә, ҡурғаш ялтыратып яһаманы беләҙектәрҙе, иҫке кер йыуыу машиналарының эсендәге "нержавейка"нан һуҡты. Олатаһынан отоп алған һөнәре буйынса ҡара алтын кеүек юлаҡ та ебәргәс, ҡара алтынлы көмөш беләҙектән айырып алғыһыҙ. Ҡатыны ла сауҙаға оҫта ла, әүәҫ тә булып сыҡты. Әлбиттә, Морат өсөн намыҫ аҡсанан ҡиммәтерәк. Олатаһы был төшөнсәне ныҡ һеңдергәйне. "Минең васыятым шул: ҡайһылай ғына байығып китһәгеҙ ҙә намыҫығыҙҙы аҡсаға алмаштырмағыҙ. Нәҫелең ауырыу булмаһын тиһәң, иң ҙур байлыҡ - таҙа намыҫ ҡалдыр мираҫҡа", ти торғайны мәрхүм ҡарт. Морат та беләҙектәрҙе "көмөш" тип алдаманы, дөрөҫөн әйтте, ә ҡатын-ҡыҙ барыбер матурлығына, семәрҙәренә ҡыҙығып һатып алды. Яратып, ҡыуанып кейҙеләр. Берећенән икенсеһе күрә барҙы, үҙҙәре теләгән биҙәк һалдырыуҙы һорап килә торҙолар. Олатаһының энә осондай ғына осло ҡасау менән беләҙеккә хыялдағы кеүек матур биҙәктәр һалғанын ҡарап ғәжәпкә ҡала торғайны Морат. Әле инде үҙе биҙәк һала башлаһа, хыял донъяһына сумып онотолоп китә. Аҙаҡ үҙ эшенә үҙе һоҡланып тора. Тик хәҙер Мораттың беләге лә һыҙлай, ҡулының көсө лә ҡалмай бара, шуға ҡатыны беләҙектәрҙе бик ҡәҙерләп кенә һаҡлай - тыуған көндәргә бүләккә генә тота. Әле лә, үҙең фатирға төшкән туғаныңа бүләккә, тип, ике генә беләҙек бирҙе. Артығын ысҡындырманы. Морат отолманы, ҡатынының һаранлығына ҡулайлашып алғайны, һәр береһенә алдан бүләк әҙерләп ҡуйғайны.

Моратты аэропорттан һылыуы Аҡсәскә менән кейәүе Аҡназар ҡаршы алды. Аҡсәскә бер туған ағаһының өлкән ҡыҙы. Йола буйынса ҡунаҡ-туғанды өлкәнләтә ҡабул итәләр. Хәҙер бер туғандарынан береһе лә ҡалманы. Ғаиләлә иң төпсөк бала, атаһы һуғыштан ҡайтҡас тыуған Морат ҡына иҫән. Ике туғандарынан иң өлкәне Аҡсәскә һылыуы менән Аҡназар кейәүе. Морат уларға бара.

Самолеттан сығыуын көтөп торған һылыуының еңгәһенә ныҡ оҡшағанын күреп аптырап китте Морат.

- Китсе, һылыу, шул тиклем дә еңгәйгә оҡшарһың икән. Ул бит тап һинең кеүек кенә ине.

- Һин дә, ҡайнаға, ҡайныма оҡшағанһың. Күргәс тә танының. Аҡсәскә бер үҙең барма, танымаҫһың, тигәйне. Таныр инем, - тип күреште Аҡназар ҙа беренсе тапҡыр күргән ҡайнағаһы менән.

Машиналары эргәһенә алып килгәс:

- Арғымаҡ үҙегеҙҙекеме? Һәйбәт! - тип һоҡланды Морат.

- Башҡорт арғымаҡһыҙ булмаҫ инде, ағай. Кейәүең өйләнгән саҡта уҡ, йәйәү йөрөтмәм, тип вәғәҙә иткәйне. Торҙо һүҙендә.

Аҡсәскә иренә йылмайып ҡарап алды. Аҡназар күңел үҫтерер был һүҙгә ирәйеп китте, баҫалҡы ғына йылмайҙы.

- Әлегә атлатып йөрөткән юҡ һылыуыңды, ҡайнаға. Тулылана башлаһа ла атлатмам, машина артынан йүгертермен генә, тип уйлайым, - тип мутлашып та алды Аҡназар.

- Нәҫелебеҙҙә ул хәтле һимеҙ кеше юҡ бит, ағай. Сама белеп йәшәй торған нәҫел ул Байрамғолдар, тип маҡтана торғайны әсәйем.

- Ай, һылыуҡайым, был хәтлем дә еңгәмә оҡшарһың да. Һағыныуҙы көсәйттең дә ебәрҙең. Күҙгә йәш алды хатта. Аптырамағыҙ инде миңә. - Тауышы ҡалтырабыраҡ сыҡты Мораттың. Ҡапылда йәш саҡтарына ҡайтҡандай тойолоп китте уға. Йән ирерлек был ирәбелектән күңеле тулды.

Иркен фатир, зауыҡ менән йыйыштырылған бүлмәләр, хатта еңгәһе килен булып төшкәндәге боронғо семәрле һандыҡ та һаҡланған. Ул һандыҡты Морат үҙе күтәрешеп алып ингәйне өйгә.

- Һин ҡалай изге күңелле ул, һылыу. Ҡомартҡының ҡәҙерен белеп тотаһың, - тип, һандыҡ семәрҙәрен һыйпап ҡуйҙы.

- Атайым менән әсәйемдең ҡарыуы ҡайтҡас, үҙемдә йәшәттем. Кинйәләтә ҡустым ҡарарға тейеш булһа ла, килен аспирантурала уҡып йөрөгәс, балалары ла бәләкәй булғас, миндә бағыулыраҡ та, тынысыраҡ та булыр тип, ебәрмәнем. Кейәүеңә лә рәхмәт, ҡайны менән ҡәйнәһенең ихлас ризалығын алды.

- Һәйбәт, һылыу, һәйбәт. Һеҙҙең ошолайтып бөтмөр генә донъя көтөүегеҙҙе күҙ алдына ла килтермәнем. Былай йәшәүегеҙҙе белгәндә еңгәңде лә алып ҡайтыр инем бергә.

Ашап алғас, Аҡназар ғәфү үтенеп, иртәрәк ҡайтырға вәғәҙә биреп эшкә китте. Моратҡа серем итергә тәҡдим итһәләр ҙә, баш тартты.

- Ҡайҙа инде, һылыу. Йоҡо осто. Һөйләшеп-һорашып ултырайым.

Әйтерһең, тыуған яҡтарға түгел, йәш саҡтарға ҡайтып төшкәнмен.

- Морат ағай, бөгөн Ғайсар ҡустымдарға барабыҙ. Килен кискә ҡунаҡҡа саҡырҙы. Өфөләге туғандарҙы тотош үҙебеҙгә йыябыҙ, Морат ағай бер юлы барыһын да күрһен, тинеләр.

- Ғаяздар ҙа Өфөлә ти ине.

- Улар ҙа Өфөлә. Ғаяз ҡустым хәҙер олоғара спорт комплексы һатып алды. Шунда бөтөн туғандарын эшкә алып бөттө. Ауылды бөтөргәс, тырым-тырағай таралышҡайныҡ, хәҙер тағы йыйылыштыҡ. Атайым, бер-берегеҙҙе ташламағыҙ, татыулыҡҡа бер ни етмәй, бергәрәк булығыҙ, терәк тә булырһығыҙ, аҙ ғүмер эсендә һағынышып та йәшәмәгеҙ, бауырҙаш туғандарҙы һағыныуҙан йөрәккә көс төшә, тигәйне. Өлкән кеше бушҡа әйтмәгәндер, васыятында торабыҙ, шөкөр.

- Кейәү ҡайҙа эшләй?

- Кейәүең дә үҙебеҙҙең яҡҡа тартҡан. Математик. Бергә уҡығайныҡ. Тик мине уҙып китте. Докторантура тамамлай.

- Ғайсар ҙа ғилем юлынан киттеме?

- Эйе. Математиканан бик көслө уҡытыусы уҡытты беҙҙе университетта. Үҙе лә көслө, һәләтле балаларҙы ла таба белә. Йыл һайын районда буйлап йөрөп йыйып ала. Беҙгә лә ул ярҙам итте. Мин әле уның менән бер кафедрала эшләйем.

- Һин дә университетта уҡытаһыңмы? Вәт әй. Мин армияға киткән саҡта бәләкәй генә инең. Апайым менән хәлегеҙҙе белергә барғанбыҙ ҙа ҡайтҡас, әсәйемә, еңгәмдең ята торған бәпесе лә бар, ултыра торғаны ла бар, шыуып ҡысҡыра торғаны ла бар, тип һөйләгәнмен. Шыуып ҡысҡыра торғаны һин инең.

- Ауылды һағынһаң, барып ҡайтырбыҙ, ағай. Кейәүең беҙҙең яҡтыҡы бит.

- Һеҙ эштә түгелме ни?

- Эштә булһаҡ ни. Йома китәбеҙ ҙә, ялға кире бороолорбоҙ. Күреп өлгөрәбеҙ. Мунса инеп тә өлгөрөрбөҙ әле. Ҡайнымдар, ҡоҙаның форсаты булһа, алып килегеҙ, тип саҡырҙылар.

- Нисек йома ҡайтһаҡ? Бер көндә етеп буламы ни?

- Өс сәғәтлек юл, ағай. Рулгә мин ултырһам ғына яйыраҡ барам.

- Ауылға тиклем асфальтмы?

- Асфальт һалынмаған, газ үткәрелмәгән ауыл ҡалманы ул, ағай, районыбыҙҙа. Утын яғыу бөттө, һәр береһенең мунсаһы ла бар, өйгә ванна ҡуйғандары ла байтаҡ. Халыҡ рәхәтләнде. Ҡайтһам, күҙем ҡыҙып, ҡыуанып киләм.

- Китсе, һылыу. Әкиәттер был.

- Әкиәт, ағай. Халыҡтың әкиәт итеп хыялланып һөйләгән тормошо ошо икән.

- Еңгәңде ултыртып машина менән ҡайтырға кәрәк булған. Тик һеҙҙе машина менән аптыратырлыҡ түгел. Үҙегеҙҙеке иң һуңғы марка. Киркоровтыҡы кеүек Хаммер менән генә ҡайтмағанда...

- Уға ла әллә ни иҫебеҙ китмәҫ ине, ағай. Анау тиклем оҙон лимузин нимәгә кәрәк булды икән, тип кенә аптырамаһаҡ...

*✓ Беҙҙең арала һаулыҡҡа йәлсемәй йәшәүселәрҙең байтаҡ булыуын үҙем ошо хәлгә тарығас ҡына белдем. Белмәҫлек тә шул - улар итәғәтле, инсафлы кешеләр.*



- Еңгәм кеүек әсе теллеһең икән, һылыу.

- Әсәйем әсе телле түгел, тура һүҙле булды. "Кәкре уҡ тура осмай. Сәпкә тейҙергең килһә, уҡтың тураһын ат", ти торғайны кейәүенә. Әле лә әсәйем теләнә эләкһәң, улай тип кенә ҡуймаҫ ине. Ҡәйнеш, нәфсең шулай сосолоп киттеме? Ҡушавтобус һымаҡ оҙон машинаға тейәлеп ҡайтмаһаң, тиер ине. Самаһыҙыраҡ эшләһәң, нәфсегеҙ сосолоп, үтә артығына ынтылмағыҙ, сама белегеҙ, тип тыя торғайны.

- Былайтып йәшәүегеҙ ҡыуаныс инде, һылыу. Фатирығыҙ ҙа һәйбәт. Һинең өсөн ҡыуанып ултырам. Ғайсарҙың да үҙ фатирымы?

- Эйе. Беҙ элегерәк өлгөрҙөк. Ә бәләкәй һеңлебеҙгә күмәкләшеп һатып алып бирҙек. Ғаяҙ үҙе теҙөттө. Ҡаланан ситтәрәк йәшәй.

- Зилә лә Өфөләме ни?

- Эйе. Ул да математик, әле мәктәптә уҡыта.

- Һеҙ шулай барығыҙ ҙа математик булып бөттөгөҙмө ни?

-Уҡытыусыбыҙ, Байрамғоловтар математикаға зирәк. Зиһендәре яҡты, тип, гел шул факультетка өгөтләй. Яңылышмай. Арыу уҡыныҡ, маҡталып эшләйбеҙ.

- Уҡытыусы апайығыҙ ҙа үҙебеҙҙең яҡтыҡымы?

- Эйе. Туған һымаҡ яҡын. Шул тиклем дә һәйбәт кеше булыр икән. Уға кешегә яҡшылыҡ эшләү яҡшылыҡ күреүҙән артығыраҡ шикелле. Бөтәнөбеҙ ҙә күҙ терәп уға килдек.

- Хәҙер бушлай бер нәмә лә эшләнмәй. Ҡулды ҡул йыуа, ике ҡул битте йыуа. Бушҡа ғына эшләнмәйҙер бит былдай яҡшылыҡ?

- Бушлай түгел, әлбиттә. Беҙгә үҙ шартын ҡуя ул: һәр берегеҙ берәүһе һәләтле бала табып килтерегеҙ, ти.

- Шулай ғынамы?.. - Морат һылыуына, шаяртмаймы был, тигәндәй, аптырабыраҡ ҡарап ҡуйҙы. Әммә Аҡсәсәктең йөҙө етди ине.

- Эйе. Район һайын үткәрелгән олимпиадаларҙа булып, һәләтле балалар эҙләп алып киләм мин дә.

- Олимпиада тигәндәй... Мин дә көслө инем теүәл фәндәрҙән. Олимпиадала ла ҡатнаша торғайным. Армиянан һуң уҡырға инергә лә уйлағайным хатта...

- Ни эшләп унда тороп ҡалдың һуң?

- Еңгәң осраны ла...

-Үпкәләмә, ағай. Әсәйем һеҙгә барып ҡайтҡас, ҡайҙан табалар шундай ҡуштан бисәләрҙе. Ялпылдап бер алдына, бер артына сыға. Теле менән әүрәтеп алдаштырып тота. Юғиһә, Себер сәтләүегенә алданып, бер балаға ғына ҡарап йәшәмәҫ ине ҡарағайҙай ҡәйнешем. Һөйләгәне әйбер, байлыҡ, ти. Аҡһаҡ таяғын һөйләгәндә, һаран аҡса һөйләр, тигәндәй, башҡа нәмә тураһында сер бүлешеп тә булманы. Нисек килеп еттегеҙ, тигән юҡ, ҡайным менән ҡәйнәм ни хәлдә, тигән юҡ, уйында аҡса ғына. Ҡаты ағасты ла йомшаҡ ҡорт ашай шул - теле-телгә йокмай, әйтәгүр, ике һүҙенең берендә, Морат бәгерем, йәнейем, тип тора үҙе, шул ҡалыуҙан ҡалғандыр инде ят ерҙәрҙә, тип, күңеле төшөп ҡайтҡайны әсәйем.

- Яҙмыштыр инде, һылыу. Хәҙер үкенеүҙең дә фәтеүәһе юҡ. Сырмалсыҡ һымаҡ ҡыҙҙар була, һылыу. Уралып алһалар, нисек ысҡынырға ла белмәйһең, - тине лә, артығыраҡ әйтеп ебәреүенән уңайһыҙланып, шып туҡтаны. Был уйын бер ваҡытта ла ҡысҡырып әйткәне юҡ ине. Әллә ни ҙә бер генә үҙен армияға оҙатып ҡалған ҡыҙы күҙ алдына килеп, йөрәген ниҙер семетеп-семетеп алғандай булған саҡта ғына ҡатынын шул ҡыҙ сағыштырып ҡарай ине. Оҙатырға килгәйне вокзалға. Буфетка инеп сәй эсерлек форсат таптылар ҙа икәүләшеп йүгерҙеләр. Өҫтөндә зәңгәр тәрткөлә аҡ күлдәк. Ике толомон үреп төшөргән. Етәкләшеп йүгереп барғанда, толомо сайҡалып китеп, Мораттың бәгеренә бәрелгәйне, ҡып-ҡыҙыл булып оялып киткән булды... Ошо мәл иҫенә төшһә, эстән генә сырмалсыҡ тураһында уйлап ала ине. Тик бер кемгә лә ләм-мим әйткәне булманы. Ә бында һылыуына серен систе лә ҡуйҙы. Әллә еңгәһе кеүек күрҙе, әллә һағынышы күңелен нескәртеп ебәрҙе.

- Ауылда йәшәү бигерәк ауыр булды бит, һылыу. Үҙең беләһең. Балтырған ашынан да ялҡып кителгәйне.

- Ә хәҙер күмәкләшеп йыйылышабыҙ ҙа йылына өс тапҡыр танһыҡҡа балтырған ашы ашап, ауылды, әләсәйемдәрҙе иҫкә төшөреп алабыҙ.

- Туғандар бер табын, бер ҡор булаһығыҙ ҙа ҡуяһығыҙҙыр инде.

- Эйе, шөкөр, үҙебеҙ бер табын. Туғандар араһына шул уҡытыусы апайыбыҙҙы ғына алабыҙ ҙа. Бөгөн ағайымдарҙа ла булыр әле.

- Яйы тура килгәндә, берәй бүләк тотоп барайым әле ул уҡытыусы апайығыҙға. Һеҙгә шул тиклем ныҡ ярҙам иткәне өсөн. Өфө һынлы Өфөгә кемгә күҙ терәп килер инегеҙ?

- Эйе шул, ағай. Берәү башлап юл ярмаһа, ҡайҙа барып төртөләһең.

- Ире менән киләме?

- Яңғыҙ ул. Фәнгә бирелгәнгәме, әллә үҙен кешеләргә ярҙам итеүгә арнағанғамы - яңғыҙы ғына йәшәй. Беҙгә һыйына. Беҙ ҙә уны бер ҡунаҡтан да ҡалдырмайбыҙ.

- Улай ҙа булғас, һылыу, күңел өсөн дә, рәхмәт йөҙөнән дә берәй бүләк алайым уға.

- Әлләсе, нимә алырһың икән? Иң яратканы - китаптар инде. Тик китапты кеше үҙе һайлап ала.

- Ә биҙәнеү әйберҙәренән нимә ярата? Алтынмы, көмөшмө? Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары көмөштө яҡыныраҡ күрә торған.

- Алтын да, көмөш тә ҡыҙыҡтырмай шикелле уны. Мин белә-белгәндән нимәләр тағып йөрөгәнен хәтерләмәйем. Әйткәндәй, ҡулдан һуғылған беләҙеге бар. Ҡара алтын ялатылған көмөш беләҙек. Шул тиклем матур итеп һуғылған. Әллә ниндәй семәрле-селтәрле хыяли биҙәктәр сүкелгән. Шуны бер һалмай кейә. Әсәһенән ҡалған ҡомарткымы ул, берәй иҫтәлекле бүләкме...

Аҡсәскә сәй яһай-яһай уҡытыусыһы тураһында һөйләнә лә һөйләнә. Олоғайып барһа ла, сәсенә әллә ни сал ҡунмаған, буй-һыны ла һомғол һаҡланған Морат ҡаршыһындағы көҙгөгә күҙ ташлай-ташлай сәй эскән еренән ҡапыл ултырған урынында һеңеп-шиңеп киткәндәй булды. Ул Аҡсәскәне тыңлаған кеүек булһа ла, бер ни ҙә ишетмәй ине инде.

Армияға Өфөнән оҙатҡан саҡта Гөлъямалының ҡулына үҙе һуҡкан ысын көмөш беләҙек кейҙергәйне бит ул.

- Һин ҡайтканда, мин өсөнсө курсҡа ғына киләм. Бергәләшеп уҡырбыҙ. Мин һинә әҙерләнергә ярҙам итермен, - тигәйне. Район үҙегендә математиканан олимпиадала ҡатнашкан саҡта таныштыҡайнылар. Олатаһынан өйрәнеп, иң тәү үҙе һуккан көмөш беләҙекте Гөлъямалдың беләгенә кейҙереп:

- Беләгеңдән һалма. Мин ҡайтканды көт, - тигәйне...

Эй, ғүмер... Мораттың башы әйләнеп киткәндәй булды, күҙҙәренә тағы йәш төйөлдө.

- Ағай, арып киттең, ахыры. Ял итеп ал.

- Ярай, һылыу. Рәхмәт.

- Төпкө бүлмәлә урын әҙерләнек. Айбулат менән Йәнбулаттың бүлмәһе ул. Иркен. Рәхәтләнеп ял ит. Улар лоджийҙа йоҡлай.

-Әйберҙәремде бүлмәгә индерәйемме, һылыу?

- Эйе, эйе, ағай. Урынлаш. Үҙ өйөңдәге кеүек бул. Ҡунаҡҡа барғанға тиклем ял итеп ал. Алыҫ юл ҡакшата инде ул.

Морат аулаҡ бүлмәлә ҡалғас, сумаҙанынан беләҙектәрен, өйө төшөрөлгән фотоларҙы алып, айырым төрөп, төпкәрәк һалып ҡуйҙы. Ҡасандыр үҙе һуккан ысын ҡара алтынлы көмөш беләҙеген күҙ алдына килтергәс, әле алып ҡайткан бүләктәре төҫһеҙләнеп ҡалғандай, мәғәнәһеҙ нәмәләр кеүек тойолдо уға.

Ҡара алтынлы көмөш беләҙек... Нисә йылдар буйы беләгенән һалмай йөрөтһөн әле...

*ҺАБАҠТАР*

# ЯБАЙ КЕШЕНЕҢ... ҠАТМАРЛЫ ФЕКЕРҘӘРЕ

## Хәсрәт тураһында

Оло юлда тормош. Ә мин -
Юл ситендә үҫкән әрем.
Үҙәгемдә өҙә гәме
Олой-илай үткәндәрҙең.

Оло юлдың бысраҡ, саңы,
Таш, ҡомдары сәсрәй миңә.
Үткән мәлдең шауҡымдары
Тамырҙарым аша һеңә.

Алһыу сәскә хуш еҫтәрен
Татыр инем мин дә яҙҙан,
Тормош әсе-сәсәләрен
Татыуҙары миңә яҙған.

Булһа ине был тормоштоң
Таҡыр шыма таш юлдары.
Бушҡа әрәм булмаҫ ине
Әҙәмдәрҙең аҫылдары.

Оло юлда тормош. Ә мин -
Юл ситендә үҫкән әрем.
Әсе тәмен биреп миңә
Һеңә саңы үткәндәрҙең.

Был тормошта яҡты уй-хистәр кисереп, донъяның камиллығына, кешеләрҙең изгелегенә һоҡланып, идиллия һиллегендә иҙерәп кенә йәшәргә кәрәк ине лә. Тәтемәй әҙәм балаһына ундай бәхет. "Ғүмер буйы бәхетле булам тиһәң - имен-һау бул!" тиҙәр. Дөрөҫ. Ләкин был тормоштоң яҙылмаған ҡағиҙәләре бар. Үҙ йүнендә хәстәрләү түгел, ә куберәгән йәнендә яҡларға, йәшәү һәләтең, йәшәргә хаҡың бар икәнде үҙеңә генә түгел, башҡаларға ла иҫбатларға тура килә. Бәлки, уныһы ҡатмарлыраҡтыр ҙа әле. Әгәр үҙеңдә башҡаларҙан һауыраҡ, һәләтлерәк итеп күрһәтә һәм лайыҡлы тота белмәһәң, хәлең харап: һине һанға ла һуҡмаясаҡтар.

Кешене ауырығанында ғына йәлләү бар. Ауырыу эргәһендә нимә ашатырға, нимә эшләргә, тип, өлтөрәп йүгереп йөрөйҙәр. Ләкин яҡындарыңдың хәстәре оҙаҡҡа бармай. Баҡтиһәң, туғандарының бөтә бәлә-ҡазалары, тормошҡа ашмаған хыялдары ул тыуҙырған мәшәҡәттәр арҡаһында килеп сыға икән. Был хаҡта хатта ауырыуҙың күҙенә тура ҡарап әйтеүҙән дә тыйылмағандар була...

Ошоға тиклем үҙ хәлен ҡулына алып, үҙ йүнен үҙе күрерлек дәрәжәгә етеп өлгөрмәгән кеше өҫтәмә ауыр кисерештәргә дусар була. Яҡындарынан йыш ҡыйырһытылыу тән ауырыуын кисереүҙән дә ауыр хәсрәткә әүерелә, яңы күңел, йөрәк һыҙланыуҙары тыуҙыра. Физик хәле уны көн һайын аҡланырға мәжбүр итә. Етмәһә, һәр бер эшкинмәгәне лә уны үҙенә бурыслы итеп күрһәткеһе килә, уға, һин минең көнләһең, минән көсһеҙһең, тип өҫтөнләгән һүҙҙәре, мөнәсәбәте менән һиҙҙерә. Был иң түбән, иң холоҡһоҙ кешенең кәсебе, әммә донъяла шулай. Был - факт! Ауырыу яҡындарының бөтә бәләләрендә уны ғәйепле һанаған нахаҡ йәберләүҙәренә түҙергә теләмәй, үҙ-үҙенән тотолоу юлдары эҙләй башлай.

Ә инде был мәлгә үҙ йүнен үҙе күреп, хәстәрләп йәшәргә ынтылған кеше башҡаларҙың ярҙамынан, артыҡ иғтибарынан баш тарта, мәшәҡәт тыуҙырмаҫҡа тырыша. Кәрәге булһа ла, йыш мөрәжәғәт итмәҫкә, яҡындарын бимазаламаҫҡа мөмкинселектәр эҙләй, күп нәмәне үҙе эшләргә өйрәнә. Артыҡ хәстәрләүҙе күрһә, хатта асыулана, тыя. Әлбиттә, ул үҙенең мәнфәғәттәрен сикләй, үҙе зыян күрә, үҙен күп уңайлыҡтар, рәхәтлектәрҙән мәхрүм итә. Шуныһы булмай! Ләкин уның хаҡы ла һәйбәт: кеше көнлөктән, сараһыҙ "әсирлектән" ҡотолоу, самалы ғына булһа ла, барыбер хаҡ һораясаҡ. Бурысыңды түләүеңде көтәсәк, улай түгел, тип ант итһә лә. Бирәсәге арткан һайын, сырхау үҙен ныҡыраҡ ғәйепле тип иҫәпләйәсәк. Был процестың сиге юҡ. Бер нәмә лә, бер ҡасан да бирә алмаһаң? Үкенесле, ләкин - факт. Бына ошонда башлана ла инде шәхес, ғаилә трагедиялары. Кеше үҙенең хәлен ни тиклем иртәрәк һәм дөрөҫ баһалай, ни тиклем тиҙерәк үҙ хәлен ҡулына ала, уның киләсәк тормошо шуға бәйле.

Кешегә кешелекле була белмәһәләр ҙә, һөрән һалып йөрөүселәр етерлек. Бәғзе берәүҙәр эт хоҡуҡтарын яҡлай, берәүҙәр бесәй аҫырар өсөн хәйер йыя, берәүҙәр таракан үрсетә...

Беҙҙең арала һаулыҡҡа йәлсемәй йәшәүселәрҙең байтаҡ булыуын үҙем ошо хәлгә тарығас ҡына белдем. Белмәҫлек тә шул - улар итәғәтле, инсафлы кешеләр. Үҙҙәренең бәләһенән һау кешеләрҙе аяр өсөн йәмғиәткә бер ниндәй дәғүәһеҙ, талапһыҙ йәшәйҙәр. Көндәлек намаҙ кеүек, йәненә, тәненә күнегеүҙәр яһап, йәшәү һәләттәрен тергеҙә, үҙен йәшәргә күндерә. Һәр көнгә яңы йәшәй башлаған кеүек ярҡлаша. Ауырыуҙы элек Алла бәндәһе, тигәндәр. Хоҙай Тәғәлә, башҡаларға фәһем, ғибрәт өсөн, үҙенең иң ауыр һынауҙарын иң яраткан бәндәһенә бирә. Алла бәндәләренең хәлен аңлап, түҙеп, ярҙам итмәгәндә лә, исмаһам, күңелдәренә төкөрмәй йәшәргә өйрәнһәк ине. Һау кешеләр өсөн өйрәнмәҫлек, үтәлмәҫлек кимәлдә ҡатмарлы түгел бит.

Йылы һүҙ - йән аҙығы, тиҙәр. Яҡындарыңа, таныштарыңа әйтер йылы һүҙҙәреңде күңелеңдә ҡалдырыуҙың бер тинлек тә сауабы юҡ. Уларҙы йәлләмәй таратып, кешене лә, үҙеңде лә ҡыуандырырға кәрәк.

Ауырыуҙың хәлен ауырыу белә, тиһәк тә, күрмәмеш-белмәмеш булыуҙы артығыраҡ күрәбеҙ. Йәнәһе, йырып сыҡҡыһыҙ эшебеҙ күп. Киң мәғлүмәт саралары төрлө ауырыуҙарҙы йәлеп итеп үткәргән ҡайһы бер күңел асыу тамашалары хәҙер көндәлек "ҡыҙыҡ" шоуҙарға әйләнеп бара. Йән, тән ғазаптары кисергән кешегә уларҙа ҡатнашыу түгел, ауырыуы тураһында һөйләүе үҙе ғәрлек. Ауырыуҙың тураһында һөйләп, ғәләмәт яҡшы шифалар тәҡдим итеп, сирлене күҙ алдында "дауалаған" булып, һау кешенең дә күңеленә шом һалалар. Күрәләтә аҫтыртын йоғонто яһап, кеше аңын ағыулап, үҙҙәренең мәкерле ниәттәрен тормошҡа ашыралар. Теләһәң-теләмәһәң дә, йәнгә шул ауырыуҙың орлоғо һалына һәм кешене ауырыуға һабыштыра. Бөгөн күптәр ошо шом аҫтында йәшәй. Дөрөҫөн әйткәндә, был - беҙҙең вайымһыҙлыҡ арҡаһында кеше йәненә ҡарата законлаштырылған диверсия!



Йәмғиәт аңы юғары үҫеш кисерә, тиһәк тә, күрәһең, сырхау-зәғифтәргә мөнәсәбәтебеҙ тәүтормош осоронан бер иле лә үҙгәрмәгән...

**Урал МОСТАФИН.**

АФАРИН!

# КҮҢЕЛ КҮРҺӘТКЕСЕ БУЙЫНСА

## һәр береһенә Гран-при бирерлек

**Үткән аҙнала Өфөлә Баймаҡ районынан сыҡҡан йәштәрҙең яҙғы байрамы - "Баймаҡ һылыуҡайы" конкурсы үтте. Бәйгелә районДың төрлө ауылдарынан килеп, юғары уҡыу йорттарында белем алыусы туғыҙ һылыу көс һынашты. Конкурс биш турҙа үтте. Абруйлы жюри бәйгенең төп бүләге - Гран-приҙы Гөлназ Таңғатароваға (Иҫке Сибай ауылы), 1-се урынды - Ләйсән Әлибаеваға (Муллаҡай), 2-се урынды - Албина Буранғоловаға (Сыңғыҙ), 3-сө урынды Гөлшат Исхаковаға (Төркмән) бирергә ҡарар итте.**

Һуңғы йылдарҙа төрлө кимәлдәге "Һылыуҡай" конкурстары бер-бер артлы гөрләтеп үтеп тора. Уларҙа һын-ҡиәфәт, кейем, элегантлылыҡ, интеллектуаль кимәл замандың иң һуңғы шоу-техник кимәлендә һынала. Яңыраҡ үткән Әбйәлил районы һылыуҙары бәйгеһендә дини мотив, йолаларҙы белеү, ашһыу әҙерләү маһирлығы өҫтөнлөк итһә, Баймаҡ һылыуҙары бәйгеһенең төп асылы барыбер ҙә күңел күрһәткесе булғандыр. Йәғни һылыуҡайҙар ниндәй генә турҙа ҡатнашһа ла - үҙ һөнәрен күрһәткәндә лә, Өфө ҡалаһы буйлап гид вазифаһын башҡарғанда ла, бейегәндә лә, йырлағанда ла, кейем һайлағанда ла, шиғыр һөйләгәндә лә үҙ күңелен, үҙ асылын ҡуя белде. Шуға күрәлер ҙә, тамашасыларға бәйгеселәрҙең бар сығыштары ла берҙәй үк оҡшаны һәм жюри ҡапылғарай урындарҙы билдәләй алмай торҙо.

Ҡыҙҙарҙың барыһы ла бәйгегә етди әҙерләнгән, уларҙың сығышындағы етешһеҙ урындар ҙа булманы түгел, булды. Әммә әлеге лә баяғы маяҡ булып балҡып торған күңел күрһәткесе фонында улар тамашасыға һиҙелмәне лә, күренмәне лә. Ҡыҙҙарҙың хатта хаталары ла был йәһәттән тәбиғи һәм урынлы кеүек ине. Жюри конкурста ҡатнашыусы ҡыҙҙарҙың береһен дә иғтибарһыҙ ҡалдырманы. "Иң мөләйем" номинацияһында Әлфинә Килмәкова еңеп сыҡты, Юлиә Арыҫланова - "Иң сая", Лилиә Бүләкова - "Иң һөйкөмлө", Рәзилә Ишморатова - "Иң егәрле" ҡыҙ тип табылды. "Тамашасы һөйөүе"н Рәмилә Шәрипова яуланы.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**



ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

## АСЛАН, БӘКӘКТӘМӘ...

Әсәйем дә, өләсәйем дә ярамаған эштән: "Аслан теймә, аслан ҡағылма, аслан улай итмә, былай итмә",- тип тыйыр ине. Уларҙың телендәге был һүҙ урыҫтың "Ни в коем случае", тигәнен аңлата.

Әсәйемдең "бәкәктәмә" тигән һүҙе тиккә йөрөп ятма, ырғаңлама кеүек һүҙҙәрҙе алыштыра. Күсермә мәғәнәһендә бәкәктәмә, кәрәкмәгән урынға ҡыҫылма, тиеүҙе лә аңлата икән. Күләмде белдереүсе "хәтлем", "шул саҡлы" кеүек һүҙҙәрҙе "тәкәбил", ти ҙә ҡуя әсәйем. Сәбәпһеҙгә лауылдап, мәғәнәһеҙ һүҙ һөйләүҙе "яңшау" ти. Мәҫәлән, яңшап торма әле, йәки "яңшаны бит, яғы сыҡҡыр", "яңшама, башым ауырта" һәм башҡа шундай һүҙҙәр бик күп әсәйем лөғәтендә.

**Иҙрис НОҒМАНОВ,**

Әбйәлил районы.

## ШЫМШЫРАҠЛАУ

Көндәргә, төндәргә, тәүлектәргә һуҙылған ямғырҙы беҙҙең яҡта "аҡ яуын" тиҙәр. Әсәйем лөғәтендә иһә ул - "шымшыраҡлау". "Мынауы яңғыры (беҙҙең яҡта ниңәлер "яңғыр" ул) шымшыраҡлап яуып тик тора. Күктең төбө тишелгәндер ул", тип әйтә торғайны әсәйем. Һүҙҙең составын тикшереп ҡараһаҡ, ул ике өлөштән: "шым"дан һәм "шыраҡлау"ҙан тора. "Шым" тигәне аңлашыла, йәғни шым, яй яуған ямғыр, ә инде "шыраҡлау" тигәне, моғайын, "сираҡ"тан йә "шараҡ"тан алынғандыр. Мәғәнәһен юллап ҡараһаҡ, "шым, яй атлаған аяҡ (сираҡ)" йәки "шым ғына һанда-һаяҡ ("шараҡ"тың мәғәнәһе) яуып торған ямғыр".

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

## ИНГЛИЗСӘ БЕЛГӘНДӘРМЕ?

"Әсәйем лөғәте" рубрикаһында "билдыуа" тигән һүҙҙе уҡып, уның килеп сығышына ҡағылышлы үҙемдең аңлатманы бирергә булдым. Был һүҙҙе беҙҙең Ейәнсура яҡтарында "Плидыуа" тип йөрөтәләр.

ӘхмәрҮтәбай яҙғанса ул бритва, лезвие тигән һүҙҙе аңлата. Лезвиела инглизсә Wlade, ҡайһы берҙәрендә Wladeua тигән яҙыу бар. Күрәһең был һүҙҙе халыҡ башҡортсалаштырып билдыуаға, плидыуаға әйләндергәндер.

**Миңзифа АҠБУЛАТОВА.**

Ейәнсура районы.

БӘЙГЕ! БӘЙГЕ!

## Гармунсылар, майҙан түре һеҙгә

**Башҡортостандың үҙ ирке Рәсәйгә менән ҡушылыуына 450 йыл тулыу байрамы сиктәрендә 16-18 майҙа Яңауыл ҡалаһында республика гармун байрамы уҙғарыласаҡ. Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге ойоштораcаҡ был сара уға нигеҙ һалыусы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Фәтих Ихсанов призына арналып үткәреләсәк.**

Конкурста ҡатнашыу өсөн гармун, тальян, милли музыка ҡоралдарын эшләүсе оҫталар саҡырыла. Байрам программаһында бәйгеселәр сығышы һәм еңеүселәрҙең Гала-концерты ҡаралған. Конкурс ике төркөмдә - 17 йәшкә тиклемгеләр һәм 18 йәштән өлкән башҡарыусылар араһында уҙғарыласаҡ. Еңеүселәр ике номинация: яңғыҙ башҡарыу һәм тальянсылар, гармунсылар сығышы буйынса билдәләнәсәк.

Конкурс репертуары милли колорит һәм үҙ төбәгендәге йыр-моңға нигеҙләнеп, ирекле рәүештә һайлана. Һәр ҡатнашыусы ике бәйге әҫәре тәҡдим итә.

Заявкалар 1 майға тиклем түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: 450077, Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 72. Республика халыҡ ижады үҙәге. Телефоны: (3472)72-53-25.

Башҡортостан Республикаһы ижтимағи берекмәләренең Үҙәк дәүләт архивы коллективы Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең мәҙәниәт, спорт, киң мәғлүмәт саралары, милли һәм йәштәр сәйәсәте бүлеге мөдире Буранбай Рәфҡәт улы Күсәбаевтың

**атаһы**

вафат булыу сәбәпле, уның тәрән ҡайғыһын уртаҡлаша.

**Донъя бер мосафирханалыр. Инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән Әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын Рәфҡәт бабайҙың.**

АҠЫЛ – ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## БЕЛЕМ АРТЫНАН ҠЫУЫП, аҡылды юғалттыҡ

Юлдар бер төрлө булмағанда, бергә план ҡормайҙар.

**(Конфуций).**

Һеҙ нәмә уйлап таптығыҙ? Ун кешенең хеҙмәтен алыштырыр машинамы? Әммә ләкин хәҙер шул ун кеше ул машинаны йүнәтә.

**(Петр Таранов).**

Бөтә бөйөк шәхестәр һәм донъя кимәлендәге ваҡиғалар ике тапҡыр барлыҡҡа килә: тәүгеһендә трагедия, икенсеһендә фарс булып.

**(Г. Гегель).**

Әгәр ҙә яуызлыҡ менән һуғарылһа, сағыу аҡыл да үҙенең баһаһын юғалта.

**(Р. Шеридан).**

Тейеш, тиеү - тирандар уйлап сығарған нәмә, ул ҡолдар күңелендәге кәрәкһеҙ бер инаныу.

**(Уильям Питт).**

Үҙең теләмәгән менән көрәштә иң шәп ысул - уға үҙен тулыһынса асылып бөтөргә ирек биреү.

**(Билдәһеҙ автор).**

Үҙгәрештәр күп булған һайын, барыһы ла элеккесә ҡала.

**(Альфонс Карр).**

Дошмандарың күберәк булыуын теләһәң, дуҫтарыңды бар нәмәлә уҙып кит. Әгәр ҙә дуҫтарың күп булыуын теләһәң, дуҫтарыңа һине уҙып китергә ирек бир.

**(Ф. Ларошфуко).**

Ҡатын-ҡыҙ булыу - бөйөк аҙым, ирҙәрҙе аҡылдан яҙҙырыу - геройлыҡ.

**(Борис Пастернак).**

Бер саҡ танылған француз модельеры Пьер Карденды: "Һеҙҙең костюмығыҙ шул тиклем ҡупшы, әллә ҡайҙан уҡ күҙгә ташлана", - тип маҡтағандар. "Әгәр ҙә күҙгә ташлана икән, тимәк, мин бөгөн ул тиклем ҡупшы кейенмәгәнмен", - тип яуап бирә модельер.

Шул тиклем күрә алмаған дошманың бармы? Булһа, һин уға байлыҡ, тормош ләҙҙәттәре, күңел асыуҙар, сикһеҙ власть телә: күрерһең, ул ошолар арҡаһында һәләк буласаҡ.

**(Жан Робине).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер саҡ Уҡытыусыға уның уҡыусыһы булыу хоҡуғын яулаусы уҡыусыһы килә. Һәр ул Уҡытыусыға бик ныҡ инәлеп:"Һиңә һәм һинең аҡылыңа тамам ышаныу өсөн бер мөғжизә күрһәт миңә", - ти. Уҡытыусы күңелһеҙ генә йылмайып ҡуя, шулай ҙа уҡыусыһына бер мөғжизә күрһәтә. Уҡыусыһы уның алдында тубыҡлана һәм тағы инәлеп:"Бынан һуң мин һинең менән һәм һин ҡушҡан теләһә ҡайҙа барырға әҙермен, үҙ ҡанатың аҫтына ал мине", - ти. Ләкин Уҡытыусы уҡыусыһына, ишеккә күрһәтеп: "Хәҙер инде һин миңә кәрәк түгел", - тип яуап бирә".**

**«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:**
Өфө ҡала округы Советы һәм хакимиәте
«Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһы
**Баш мөхәррире:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.
**Мөхәрририәт:** Вячеслав ГОЛОВ, Әхмәр ҮТӘБАЙ, Радик ӨМӨТҠУЖИН, Рәлиә БИКТИМЕРОВА

**Телефондар: 253-25-44; 252-39-99.**
E-mail: kiskeufa@ufacom.ru

«Киске Өфө»нөң индексы – 50665.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте, 2**53-25-44, 272-89-09, 273-35-92** телефондары буйынса, «Вечерняя Уфа», «Уфимская неделя» һәм «Киске Өфө» гәзиттәренә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 2**53-25-44** телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

Гәзит РФ Матбуғат эштәре, телерадиотапшырыуҙар һәм киң информация саралары министрлығының Волга буйы төбәк-ара территориаль идаралығында теркәлде. Теркәү таныклығы №7 –1675.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды,
(450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

Тиражы - 6004
Заказ 1951